**Тунджер Джюдженоглу**

# Хәл белеүсе

*(ике шаршаулы трагикомедия)*

**(Ziyaretçi)**

*Әсәйемә һәм донъялағы барлыҡ*
*әсәләргә бағышлайым*

***Ҡатнашалар:***

**ИР:** 35 йәштәрҙә. Психиатр. Үҙенә нимә әйтһәләр ҙә аңлай, әммә күҙ ҡарашы менән генә яуап бирә ала.

**ҠАТЫН:** 30 йәштәрҙә. ИРҙең ҡатыны. Учреждение хеҙмәткәре. Матур, сәләмәт.

**ӘСӘ:** 60 йәштәрҙә. ИРҙең әсәһе...

**ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ:** 40 йәштәрҙә. Үлем фәрештәһе (Ғазраил). Һөйкөмлө генә.

**ТЕЛЕФОН АША ТАУЫШ**: ҡуштан ирҙең әүрәткес тембры...

**Урыны:** ниндәй илдә булһа ла.

**Ваҡыты:** беҙҙең көндәр.

***Йыһаз***

Заманса дауахана палатаһы.

Ауыр ҡорғанлы тәҙрә.

Ауырыу ятҡан карауаттың баш яғы стенаға ҡаршы ҡуйылған.

Төнгә ҡалыусылар өсөн кушетка.

Ике ишек, уларҙың береһе коридорға, икенсеһе ванна бүлмәһенә сыға.

Дауаханаға хас төрлө йыһаздар.

***Беренсе күренеш***

(Бүлмәлә Ир менән ҠАТЫН. ИРҙең күҙҙәре йомоҡ, ул карауатта хәрәкәтһеҙ ята. ҠАТЫН асыулы... Ул ИРҙең ҡулын һаҡ ҡына ҡулына ала... Уйға ҡала... Нимә эшләргә белмәй, радионы ҡабыҙа... Инструменталь көй яңғырай... ҠАТЫН сәғәткә ҡарай, шунан палата буйлап тегеләй-былай йөрөй башлай... Телефон шылтырай...)

ҠАТЫН (*ашығып телефон трубкаһын ала*): Алло...

ТАУЫШ: Һаумыһығыҙ.

(*ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ инә... Йәшенеп, тыңлай...)*

ҠАТЫН. Был һеҙме?

ТАУЫШ. Эйе... Ҡамасауламайымдыр ул?

ҠАТЫН: Нишләп улай тиһегеҙ?

ТАУЫШ: Тауышығыҙҙан һиҙәм... Йыш шылтыратыуымды оҡшатмаһағыҙ, әйтегеҙ, йәме...

ҠАТЫН. Үтенеп һорайым! Әлеге хәлемде аңлайһығыҙ ҙа инде...

ТАУЫШ. Беҙҙең ауырыу ни хәлдә?

ҠАТЫН. Әлегә үҙгәрешһеҙ... Һеҙ күргәндә, дүрт көн элек, нисек булған, шул көйө... Бер сәғәт элек профессор килеп китте...
ТАУЫШ: Шулай күп иғтибар бүленгәс, бигерәк һәйбәт...
ҠАТЫН: Ирем үҙе врач бит... Шуға медиктар уның тирәләй күбәләк һымаҡ әйләнә... Береһе китеүгә икенсеһе килеп етә... Барыһы ла күҙәтә, тикшерә...
ТАУЫШ: Әлдә мин уның хәлендә түгел. Унан эҙлә инде докторҙарҙы... Мин бит үҙем врач түгел...
ҠАТЫН (*йылмая*). Шаяртмағыҙ әле...
ТАУЫШ. Күңелегеҙҙе әҙерәк кенә булһа ла күтәреүемә шул ҡәҙәре шатмын...
ҠАТЫН (*илап ебәреүҙән тыйылып*). Күңелемде ныҡ күтәрҙегеҙ инде...
ТАУЫШ. Ярай инде...ярай...үтенәм...
ҠАТЫН (*үҙен ҡулға алып*). Нервым бөттө инде... Профессор мейегә барыусы артерияла тромб барлыҡҡа килгән, тине... Әгәр ойошҡан ҡан таралмаһа, ҡотҡарып булмаясаҡ... Ул ошолай ҡаласаҡ... Мәңгегә...
ТАУЫШ. Үтенәм, кәрәкмәй... Һеҙ өҙгөләнһәгеҙ, миңә ҡыйын... Мин әйтте тигеҙ, ул барыбер аяҡҡа баҫасаҡ... Ул йәш бит әле...
ҠАТЫН.Белмәйеееем...
ТАУЫШ. Ғазапланыуығыҙ уны аяҡҡа баҫтырыр булһа, мин дә  һеҙгә ҡушылып өҙгөләнер инем.
ҠАТЫН. Мин дүрт тәүлек буйы ошондамын. Көндөҙ еңелерәк ул, кеше килә-китә тора... Һәр хәлдә коридорҙа аяҡ тауыштары  ишетелә. Ә төндә? Дауаханала бер кем юҡ. Ул да мин генә... Радио булмаһа, бөтөнләй аҡылдан яҙыр инем...
ТАУЫШ. Мин дә шылтыратам... Һеҙгә йышыраҡ шылтыратырға кәрәк икән...
ҠАТЫН. Рәхмәт...
ТАУЫШ. Әсәһенән һаман хәбәр юҡмы?
ҠАТЫН. Ул бөгөн кискә килә... Шунан мин өйгә ҡайтып китәм. Беләһегеҙме, мин дүрт көн ванна инмәгәнмен.
ТАУЫШ. Әгәр әсәһе килһә, һеҙгә иртәгә мотлаҡ эштә булырға кәрәк.
ҠАТЫН. Нимә, әллә берәй нәмә булдымы?
ТАУЫШ. Бәлки, мине артыҡ шикләнеүсән, тип уйларһығыҙ. Шулай ҙа әйтәм инде... Ҡул ҡуйҙырыр өсөн ул-был ҡағыҙҙарҙы индергән саҡта беҙҙең кадрҙар бүлеге начальнигы: “Иҡтисад камотоз хәлдә”, - тине. Шунан кинәйә менән: «Ошондай ситуацияла ҡасанға тиклем бихисап хеҙмәткәрҙе үҙебеҙ һөйрәп йөрөтөрбөҙ икән?» - тип өҫтәне.
ҠАТЫН. Минең быға ни ҡыҫылышым бар? Бер аҙна ғына эштә булманым инде... Хәлемде бөтәһе лә күреп тора...
ТАУЫШ. Мин бигерәк шикләнеүсән, ахыры... Бәлки, “коматоз хәлдә” тигән һүҙ шундай ассоциация тыуҙырғандыр... Шулай ҙа, ныҡ һаҡ булырға кәрәк... Һуңғы

алты айҙа законлы рәүештә отпускыға киткән ете кешене эштән сығарғандарын беләһегеҙ ҙә инде... Эшегеҙҙең күп өлөшөн өндәшмәй генә үҙем атҡарһам да... Һеҙһеҙ ҙә эшегеҙ шәп барғанын бер кем дә аңғармаҫҡа тейеш. Һеҙ мине аңлайһығыҙмы? Һеҙ иртәгә мотлаҡ эшкә сығырға тейешһегеҙ...
ҠАТЫН. Мин эшкә сығам...
ТАУЫШ. Әсәһе килһә, миңә һуғыла алаһығыҙ... Бөгөн кис...
ҠАТЫН. Мин һеҙҙе аңламайым...
ТАУЫШ. Рәхәтләнеп һөйләшеп ултырырбыҙ, эс серҙәребеҙҙе бүлешеп...
ҠАТЫН. Был ҙур... бик ҙур хата буласаҡ... (*итәғәтле итеп*) Етмәһә, миңә ванна инергә кәрәк...
ТАУЫШ. Минең өйөмдә лә йыуына алаһығыҙ...
ҠАТЫН. Юҡ, юҡ... Улай ярамай, насар була...
ТАУЫШ. Һеҙ миңә ышанмайһығыҙмы ни?
ҠАТЫН. Эш һеҙгә ышанмауҙа түгел... Миңә өйгә ҡайтырға кәрәк...
ТАУЫШ. Шулай ҙа, кире уйлаһағыҙ, шылтыратырһығыҙ... Оялмағыҙ, йәме?
ҠАТЫН. Шылтыратыуығыҙ өсөн рәхмәт...
ТАУЫШ. Һау булығыҙ.
(*ҠАТЫН трубканы әкрен генә урынына һала. Тик оҙаҡ ҡына унан ҡулын алмай.)*
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. (*сәхнә артынан*). Хәйерле кис...
ҠАТЫН (*ХӘЛ БЕЛЕҮСЕне күргәс, яланғас кеше һымаҡ, ҡулдары менән күкрәген ҡаплай)*. Берәйһен эҙләйһегеҙме әллә? (*Ҡурҡып)* Һеҙ...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Мин һеҙҙең ирегеҙҙең дуҫы...
ҠАТЫН. Хәйерле кис...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ултырайыммы?
ҠАТЫН (*ҡурҡып)* Ултырығыҙ...
(*ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ кушеткаға ҡулындағы футлярҙы һала... ИРгә ҡарай... ҠАТЫН уны танырға тырыша...)*
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ирегеҙҙе ауырыу хәлдә күреү бигерәк ҡыйын...
ҠАТЫН. Хәлемә инеүегеҙгә рәхмәт...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ниҙәр булғанын бөгөн генә белдем. Нык ҡайғырҙым... Шундуҡ автобусҡа йүгерҙем дә, килә һалып еттем. (*ҠАТЫНға одеколон флаконы һуҙа. ҠАТЫН ала)*.
ҠАТЫН. Рәхмәт... Тик был мәлдә хәл белеүселәрҙе үткәрмәйҙәр. Нисек үттегеҙ һуң?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ҡарауылсылар ҙа кеше. Ҡатындары, балалары бар... Хәҙерге заманда донъя көтөү ауыр...
ҠАТЫН. Ғәфү итегеҙ. Мин һеҙҙе аңламайым.

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Был фиҙәкәр хеҙмәт кешеләренә ярҙам итеү зарур... Бөтәһе лә өйҙә телевизор ҡарап ултырған мәлдә, улар бында үҙ бурыстарын үтәй... Шуның өсөн уларҙы дәртләндереп ебәрергә кәрәк. Һеҙ былдай ярҙамды хупламайһығыҙмы ни?
ҠАТЫН. Минең аңлауымса, һеҙ уларға ришүәт биргәнһегеҙ...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Бирһәм ни... Әгәр мин уларға һеҙ әйткән нәмәне тоттормаһам, бында инә алмаҫ инем... Шулай булғас, дуҫымдың хәлен дә белә алмаҫ инем... Алты сәғәтлек юлдан һуң шундай трагедияны күтәреп ҡара...
ҠАТЫН. Ғәфү итегеҙ, мин һеҙҙе танымайым бит әле...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ә мин һеҙҙе танынығым...
ҠАТЫН. Беҙ таныш түгел дә инде... Туйыбыҙҙа ла булманығыҙ, ахыры...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Эйе, булманым. Ирегеҙ – минең балаклыҡ дуҫым... Футбол уйнағанда гел ҡапҡа һаҡланы... Шәп һаҡланы... Селтәрҙең төрлө мөйөшөнә атылған тупты, бесәй һымаҡ ырғып, кире ҡаға... Ул футбол йондоҙо ла була алыр ине... Футбол йондоҙо булыу нимәне аңлата, беләһегеҙме? Ул – шөһрәт, мул аҡса... Машиналар... Йорттар... Табыныусылар һөйөүе... Ә бөгөнгө көндә, эштән ситләшеп, берәй абруйлы гәзиттә спорт тураһында мәҡәләләр яҙыр ине... Йә телевидениела спорт комментаторы булып китер ине... Ҡалай шәп булыр ине... (*ҡулына микрофон тотҡан комментатор булып ҡылана*). Ә хәҙер хөрмәтле эксперттар фекеренә ҡолаҡ һалайыҡ... Әйтегеҙ әле, әлеге ситуацияла оффсайд булдымы? Аяҡ салдылармы, әллә тупты һаҡланыларmы? Көндәш-командан берәүҙең яңылыш ҡына шортыһы һыпырылыу өсөн пенальти иғлан итерҙәр микән? Әгәр пенальтинан алда ҡапҡасы тупты тотоп өлгөргән булһа, ошо уҡ ҡапҡаға ҡабаттан туп тиберҙәр ине микән? Ҡаршы командалағы уйынсының ҡултыҡ аҫтына туп бәргән футболсыға иҫкәртеү иғлан ителерме? Ирегеҙ тамашасыларға ошо мәсьәләләр буйынса аңлатма биреп йөрөһә, ҙур файҙа булмаҫ инеме ни? Шуныһын да оноторға ярамай: бөтә нәмә лә кешегә һәйбәт булһын өсөн генә эшләнә... Әммә ул табип һөнәрен һайланы... Дөрөҫөн әйткәндә – үҙен ҡорбан итте... Ғүмеренең иң шәп биш йылында, аптекарҙар генә танырлыҡ почерк менән рецептар яҙып, йүнһеҙ шарттарҙа йәшәне... Бар хәленсә ауырыуҙарҙы һауыҡтырырға тырышты. Фатир өсөн түләй алмай, һалым хеҙмәтенә бурысҡа батып... Кабинетын нисә тапҡыр ябырға маташып ҡараны, үҙегеҙ беләһегеҙ ҙә инде... Әгәр ул акушер һөнәрен үҙ итһә, икенсерәк булыр ине, тик ул психиатрияны һайланы, һәм ныҡ яңлышты...
ҠАТЫН. Эйе, беҙгә бик күпте кисерергә тура килде...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Былары ирегеҙ һөйләүе буйынса белгәнегеҙ генә... Ә һеҙгә һөйләй алмай, үҙендә һаҡлағандары... Йоҡоһоҙ төндәр... Ирем икенсе ҡатын тапҡан, тип

шик-шөһәнән ыҙалаған мәлегеҙҙә, ул көндәлек проблемалар менән көрәште... Һеҙҙең ревизор килеүен көткәнегеҙ бармы ни ул....
ҠАТЫН. Бер мәл ул төшөндә икенсе ҡатындың исемен әйтте... Күңелемә ниндәй шик оялағанын белһәгеҙ икән... Пациенткаһының исеме икәнен белгәс...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Дөрөҫөн генә әйткәндә, ул үҙ кабинетын асып харап булды. Ирегеҙгә дауаханала ғына эшләргә кәрәк ине...
ҠАТЫН. Шундай эште көн дә эҙләне ул... Таба алманы... Университет ҡына тамамлаған... тәжрибәһеҙ табип кемгә кәрәк...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Эште ҙур ерҙә башламаҫҡа ине... Берәй бәләкәй генә ҡалала маташһа...
ҠАТЫН. Улай булмай ине шул. Бәләкәй ҡалаларҙа кешеләр йән дауалаусыға мохтаж түгел.
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Нишләп? Провинцияла тормош яҡшыраҡмы ни?
ҠАТЫН. Беҙҙең кешеләр тешенең һыҙлағанын һурҙырғандан һуң ғына һиҙә...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Шулаймы ни... Был турала уйлап ҡарағаным да юҡ ине... Эште бәләкәй ҡалаларҙан башламауығыҙ һәйбәт булған икән дә... Ул саҡта, тәүбә, икегеҙ ҙә ошонда ярыш ятыр инегеҙ... Ә уның әсәһе, һеҙҙе ҡарап, арағыҙҙа...
ҠАТЫН. Ул мине түгел, улын ғына ҡарар ине...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Дөрөҫ әйтәһегеҙ... Уның әсәһе һеҙҙе бик өнәп етмәгәнен онотоп киткәнмен...
ҠАТЫН. Шулай шул... Ә һеҙ барыһын да ҡайҙан беләһегеҙ?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Мин ирегеҙҙең дуҫы, тип әйттем дә инде... Дөрөҫөрәге – ирегеҙҙең дуҫы инем...
ҠАТЫН (*шунда уҡ*). Ул бит тере!..
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Шул да булдымы тормош? Ул бит ҡулын күтәреп, һыулы стакан да тота алмай... Бәҙрәфкә барыр өсөн тора ла алмай... Ул хатта... һине ярата ла алмай... Нигеҙе ныҡ булмаған йәмғиәт йәшәй алмағандай, быны ла беҙ йәшәүгә һанай алмайбыҙ... Әллә мин яңлышаммы?
ҠАТЫН. Нишләптер бында бәйләнеш юҡ һымаҡ.
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Булмаған ҡайҙа! Ирегеҙ бөтәһен дә, хатта физиологик хәжәтен дә, һеҙгә ауҙарған түгелме һуң? Нимә оҡшай, нимә оҡшамай, шуны ла әйтә алмай ҙа баһаң! Ҡыйын, тип берәй нисек күрһәтә аламы һуң?
ҠАТЫН. Һеҙ әллә революционермы?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Нишләп улай тиһегеҙ?
ҠАТЫН. Студент саҡта мине лә, бүтәндәрҙе лә шул һорауҙар ҡыҙыҡһындыра торғайны...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Теләктәштәр араһында булғанһығыҙҙыр, тип уйлайым.

ҠАТЫН. Таныштарым: “Бер ҡасан да ысын революционер була алмаясаҡһың”, - тип әйтә торғайнылар... Мине хатта “бәләкәй буржуй” тип йөрөттөләр... Ҡараштарым ысынбарлыҡҡа тап килеп етмәй, тиҙәр ине...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ә мин һеҙҙе реалист, тип һанайым. Улай булмаһа, ошо мәлдә ер аҫтында ятыр инегеҙ, хөрриәт тормошта йәшәп... Барыһы ла бер тиң, ыҙғыш-талаш юҡ, тыныс... Дуҫтарығыҙ онотмай, иҫкә алып, ҡәберегеҙҙе ҡыҙыл ҡәнәферҙәргә күмә... Бигерәк хисле күренеш, ибет?.. Шундай гүзәл, мәңгелек ғүмерҙе мин генә бүләк итә аламдыр ул...

ҠАТЫН. Әллә һеҙ контрреволюционермы?

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Нимә, әллә шуларҙы хәтерләтәмме?

ҠАТЫН. Һеҙ бит үҙегеҙ үҙегеҙгә ҡаршы киләһегеҙ.

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Юҡсы...

ҠАТЫН. Бына әле һеҙ кеше булыуҙың өҫтөнлөгөн һанап сыҡтығыҙ...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Дөрөҫ... Үҙ яҙмышын хәл итә алмаған, бер нәмәне лә һиҙмәгән, тоймаған кешене тере, тип әйтеп булмай инде ул...

ҠАТЫН. Һеҙгә, тимәк, әүҙем шәхестәр оҡшай...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Оҡшатыу ғына түгел, ундай кешеләрҙе мин хуплайым...

ҠАТЫН. Әммә һеҙҙең тел төбөгөҙҙән: ундайҙарҙы үлтерә лә алыр инем, тигәнде аңлап була...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Был минең шәхси ҡараш... (*өҙөк-өҙөк тауыш менән*). Ҡылған эштәребеҙҙең һәм ҡарарҙарыбыҙҙың барыһы ла үҙебеҙгә оҡшай, тип әйтә лә алмайым...

ҠАТЫН. Ғәфү итегеҙ, тик һеҙҙең фекерҙәрегеҙ миңә сәйер тойола...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. “Сәйер” тигән урынға “ысын” тип әйтһәгеҙ, мин ҡыуаныр инем... Әгәр Маркс әле тере булһа, концепцияһын теге донъяға яраҡлаштырып ҡорор ине. Шунда ғына ул хыялын бойомға ашыра ала... Сөнки тиң хоҡуҡлы бағыйлыҡта ғына бер үк кәфендәге байҙар һәм ярлылар осрай. Ер аҫты батшалығында ғына һуғышһыҙ һәм эксплуатацияһыҙ тормош хөкөм һөрә. Әгәр бында, ерҙә, тиң хоҡуҡлылыҡ өсөн көрәшеүселәрҙе ихтирам итмәһәк, кемде һуң... Улар йәне-тәне менән, һуңғы тамсы ҡаны тамғанса... Көрәш хаҡына улар йәндәрен, ғаиләләрен, булған бөтә нәмәләрен фиҙа ҡыла... Нимә өсөн һуң? Икенсе үлсәмдә былай ҙа йәшәп килгән донъя ҡоролошона алдараҡ барып етер өсөнмө... Зинһар өсөн, мине ихтибар менән тыңла... Сөнки бөтә ғиллә ошонда...

ҠАТЫН. Ә һеҙ нимә менән шөғөлләнәһегеҙ?

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Мин нимә менән шөғөлләнә алам?

ҠАТЫН (*уның серлелегенә ҡыҙығып*). Һеҙ... музыканттыр ул...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Нишләп улай тиһегеҙ?

ҠАТЫН (*футлярға күрһәтеп*). Был скрипка түгелме ни? Әллә саксофон инде...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ғөмүмән алғанда, ҡорал, тиеүегеҙ хаҡ... Әммә ул музыкаға бер нисек тә бәйләнмәгән... Мин дә музыкант түгел...

ҠАТЫН. Тороп тороғоҙ... әйтмәгеҙ... Хәҙер беләм... нимә менән шөғөлләнгәнегеҙҙе...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Белә алырығыҙға ышанмайым, шулай ҙа, әйҙә уйлап ҡарағыҙ... Һорау бирегеҙ. Мин. аңғартыбыраҡ, ярҙам итермен, баштан уҡ шулайта инем инде... Һорағыҙ... Биш һорау бирергә рөхсәт итәм... Тик тәүҙә үк ошондай ҡағиҙәне билдәләйек... Мин “эйе” йә “юҡ” тип кенә яап бирәм. “Эйе” йә “юҡ.” Килештекме?

ҠАТЫН. Килештек...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Минең тағы бер шартым бар бит әле... Биш тапҡыр һорау биргәндән һуң, һеҙ ике фаразығыҙҙы әйтә алаһығыҙ... Килештекме?

ҠАТЫН. Юҡ, икәү әҙ була... Әйҙә, өсәү булһын...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Өсәү икәүгә ҡарағанда бик үк күп тә түгел инде...

ҠАТЫН. Барыбер күберәк... Миңә шул етә лә ҡуя...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ярай улайһа. Һеҙ өс фараз әйтә алаһығыҙ...

ҠАТЫН. Ә мин берәүҙән үк тапһам...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ҡарарбыҙ... Туҡтағыҙ әле...(*уйлана*)... Әйҙә бүләк тураһында килешәйек... Юҡһа, бушҡа ваҡыт үткәреү булыр...

ҠАТЫН. Беләһегеҙме, мин әле шундай бәхетлемен. Дүрт көн буйы ыҙалатҡан рухи төшөнкөлөктән ҡотолдом...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ә бәлә бынан да иртәрәк килгәйне бит... Хаталанмаһам, йөрәк өйәнәге ярты йыл элек булғайны түгелме?

ҠАТЫН. Ә һеҙ уны ҡайҙан беләһегеҙ?

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ул оҙаҡ ҡына көрәште...

ҠАТЫН. Кем менән?

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Үлем фәрештәһе Ғазраил менән... Ул саҡта еңде... Коллегалары, профессиональ берҙәмлек күрһәтеп, шундуҡ ярҙамға ташланды... Тәрбиәләнеләр... Шул тиклем... Бер айҙан уны дауахананан өйөнә ҡайтарҙылар... Көндөҙ һин эшкә йөрөгән саҡта, улының баш осонда әсәһе ултырҙы...

ҠАТЫН (*тертләп)*. Түҙеп торғоноҙ ине был...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Эйе, түҙеп торғоноҙ, сөнки ул ҡапыл ғына үлеп китә ала ине...

ҠАТЫН. Юҡ, тормошомдо был хәл түгел, ә әсәһенең һәр саҡ эргәлә булыуы тамуҡҡа әйләндерҙе... Ул өйгә эйәләшеп алды ла, бөтә нәмәгә ҡыҫыла башланы... Ҡараштары менән мине ашаны ғына... Ошо хәлгә ул минең арҡала тарығанмы ни... Мин бөтә нәмәгә лә ғәйепле инем... Улын алып киттем, минең арҡала көйҙө, уңышһыҙлыҡтарға осраны... Шундай шарттарҙа йөрәк өйәнәгенән башҡа нимә булһын... Сәнки улын мин харап иткәнмен...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Әгәр һеҙ хәҙер ҡәйнәгеҙ тураһында нимә уйлағанығыҙҙы тасуирләп һөйләй башлаһағыҙ, һөнәремде уйлап табыу оҙаҡҡа һуҙыласаҡ... Бәлки, ғүмер буйыналыр ҙа... Ә минең бөтөнләй ваҡытым юҡ! Бөтә ерҙә лә шулай күңел асып йөрөһәм, эшемде атҡара алмаясаҡмын... Яңынан төп темабыҙға ҡайтайыҡ... Һөнәремде асыҡлай алһағыҙ, минән нимә алыр инегеҙ?

ҠАТЫН. Белмәйем...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Нимә теләйһегеҙ, шуны һорағыҙ.

ҠАТЫН (*көлөп*). Һеҙ әллә Аладдин шәменән сыҡҡан енме?

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Уның бит бер ирене ерҙә, икенсеһе – күктә... Шуға мин быны һорауға иҫәпләмәйем... Һорағыҙ...

ҠАТЫН. Ә призға нимә була? Ул һеҙҙең һөнәргә бәйлеме?

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ (*ҡыуанып)*. Бәлки бәйлелер ҙә... Ғәмәли бер нәмә ул... күрһәтелә торған... Ысыны менән демонстрация...

ҠАТЫН. Ошолай һуңмы?

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ғәҙәттә төн – иң ҡулай мәл...

ҠАТЫН. Ә һеҙҙе стена артында йә коридорҙа ишетеп ҡалһалар? Әгәр бөтә дауахана аяҡҡа баҫһа?

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Дауаханала быға күнеккәндәр инде... Иҫтәре лә китмәй, сөнки был көнөнә өсәр-бишәр тапҡыр ҡабатлана...

ҠАТЫН. Тимәк, һеҙ бөтәһе лә белгән, күргән нәмә менән шөғөлләнәһегеҙ...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Шулай тиергә лә була... Һөҙөмтәһен ғәҙәттә бөтәһе лә күрә... Ҡайһы саҡ күренеш мәлендә тамашасылар ҙа ҡатнаша ала...

ҠАТЫН. Ҡыҙыҡ... Мәсьәләне сисә алмаҫтай булһам, хәҙер үк әйтегеҙ, уйындан баш тартырмын...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Беҙ уны һеҙ теләгән бер ваҡытта өҙә алабыҙ...

ҠАТЫН. Ярай. Ә һеҙ минән нимә һорарһығыҙ һуң?

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Һеҙ минең дуҫымдың ҡатыны... Һеҙҙең турала ла, уның тураһында ла уйлап, икегеҙгә лә файҙа килтерерлек бер нәмәне һораясаҡмын...

ҠАТЫН. Икебеҙ ҙә  файҙа күрәбеҙме ни?

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Уның әсәһенә лә файҙа буласаҡ...

ҠАТЫН. Ҡәйнәмә лә, миңә лә кәрәк була торған нәмәме? Юҡ, булмаҫ...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Аптыраһағыҙ ҙа, шулай... Башлайыҡ инде... Тик әйткәнемсә, “эйе” йә “юҡ”...

ҠАТЫН. Иҫләйем...Тәүге һорауымды бирәм (*уйлана*). Һеҙҙең эш... бер урында башҡарыламы, әллә төрлө ерҙәме?

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Мин бит бындай  һорауға“эйе” йә “юҡ” тип яуап бирә алмайым. Һорауығыҙҙы яңынан төҙөгөҙ ...

ҠАТЫН. Һеҙ эшегеҙҙее ниндәйҙер билдәле бер урында башҡараһығыҙмы?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Юҡ...
ҠАТЫН. Тәәәк... Тимәк, бер урында ғына түгел... Улайһа, һеҙ билдәле бер арауыҡҡа бәйләнмәгәнһегеҙ... Икенсе һорауға күсәм... Эшегеҙ ҡатындарға ғына бәйлеме?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Юҡ...
ҠАТЫН. Бик һәйбәт... Тимәк ирҙәр менән дә... Ҡатындар менәнме, ирҙәр менәнме, ҡарттар менәнме, йәштәр менәнме: кем менән эшләһәгеҙ ҙә быныӊ әһәмиәте юҡ... Күсенеп йөрөүҙе талап иткән профессия... Һөнәрегеҙ аҙыҡ-түлеккә бәйлеме, кейем-һалымғамы?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Тағы ла ике өлөштән торған һорау бирәһегеҙ...
ҠАТЫН. Аҙыҡ-түлек менән шөғәлләнәһегеҙме?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ (*үҙенә үҙе*). Тамаҡ тамуҡҡа төшөрә, тиҙәр бит. Нисек яуап бирергә икән? (*уйлай*) Юҡ...
ҠАТЫН. Ярай, кейем-һалым йәһәтенән нисек?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Шундай һорау бирәләрме ни?
ҠАТЫН. Һөнәргеҙ кейем тегеүгә бәйлеме?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Юҡ... Һуңғы һорау ҡала... Ныҡлы уйлағыҙ...
ҠАТЫН *(уйлай*). Һеҙ һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә эшләйһегеҙме, шул уҡ ваҡытта музыка ҡоралын да ҡулланаһығыҙмы?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Һеҙ тағы ла бер ыңғай ике һорау бирҙегеҙ...
ҠАТЫН. Музыка ҡоралында уйнап, кеше дауалап булмаймы ни?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Табип пациентын скрипка моңо менән дауалай ала, тип әйтергә теләйһегеҙме? Әллә һеҙҙе дөрөҫ аңламанымммы?
ҠАТЫН. Һеҙ бөтә нәмәне лә дөрөҫ аңлайһығыҙ... Нишләп, улай булмаймы ни?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ундай дауалау төрөн ғүмеремдә лә күргәнем юҡ... Миҫалдар килтерһәгеҙ ҙә, бәхәсләшеп тормаясаҡмын. Шуға һорауығыҙҙы ҡабул итәм һәм яуап бирәм... Юҡ... Шулай итеп, һорауҙар тамам... Хәҙер өс төрлө яуап тәҡдим итә алаһығыҙ... Ныҡ ҡына уйлағыҙ. Әйтегеҙ. Көтәм...
ҠАТЫН. Күсенеп йөрөүсе профессия... Төрлө енестәге, төрлө йәштәгеләргә ҡағыла... Шулаймы?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ана бит, тағы һорау бирәһегеҙ... Ярай инде, ярҙам итеп ебәрәйем... Эйе...
(*ҠАТЫН уйға ҡала*)
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Көтәм... Эсегеҙе бошорғом килмәһә лә әйтәм, барыбер мин еңеүсе буласаҡмын...
ҠАТЫН. Алдан ҡысҡырған кәкүктең башы ауырта... Бәлки, мин еңеп ҡуйырмын...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Шул тиклем үк тырышмаһағыҙ ҙа була... Еңгәндә лә еңелгән хәлдә ҡаласаҡһығыҙ... Әммә һөҙөмтәлә еңәсәкһегеҙ...
ҠАТЫН. Аңламайым, нисек бер үк ваҡытта еңелергә лә, еңергә лә була ул...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Был хаҡта хафаланмағыҙ инде... Шулай ҙа була икәнен аҙаҡ барыбер аңларһығыҙ...
ҠАТЫН. Ә минең еңелмәй генә еңеүсе булғым килә...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Һуҙылмағыҙ инде... Яуап көтәм бит...
ҠАТЫН. Һеҙ музыкантмы?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Әйттем дә инде, музыкант түгел, тип...
ҠАТЫН. Футлярығыҙ музыка ҡоралы өсөн бит...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Юҡ тим бит, юуууҡ... Эй, Хоҙайым... Әйттем бит инде, юҡ, тип, юҡ... Һеҙгә мөмкинлек ҡалдырыр өсөн, ишетмәмеш булам...
ҠАТЫН. Асыуланмағыҙ инде... Эй ҡыҙыҡ... Ярты йыл буйы шулай һөйләшкәнем булманы...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Беҙ әле һөйләшмәйбеҙ, ә көрәшәбеҙ...
ҠАТЫН. Нимә тип атаһағыҙ ҙа был шул тиклем мәрәкә... Өйләнгәнһегеҙме?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Тағы һорау... Һеҙҙең арҡала бәхәс сәбәбенән йыраҡлашҡандан йыраҡлашабыҙ...
ҠАТЫН. Ә мин улай тип һанамайым.... Минең һорауым төплө...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ (*күңелһеҙ ҡиәфәттә*). Эйе, өйләнгәнмен. Өс балам бар... өс үлем фәрештәһе...
ҠАТЫН (*уны яманлағандай*). Балаларығыҙ тәрбиәһеҙ, тәртипһеҙҙер ҙә ул... Ә шулай ҙа уларҙы үлем фәрештәләренә тиңләүегеҙгә ҡаршымын...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ (*ҡоторop*). Улар бит ысын үлем фәрештәләре! Аңлайһығыҙмы мине? Өсөһө лә! Ике малай, бер ҡыҙ!..
ҠАТЫН. Көймәгеҙ... Балаларығыҙ һеҙҙе ныҡ ыҙалата икән... Шулай ҙа уларға ҡарата ул ҡурҡыныс һүҙҙе ҡулланмағыҙ... Нindәй булһалар ҙа, балалар бит... Шулай ныҡ ыҙалатҡандарына һеҙ йәл дә ул...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ (*асыуынан тыны ҡыҫылып*). Ҡатыным да үлем фәрештәһе!..
ҠАТЫН. Бына һиңә!.. Уларҙан ыҙалағанығыҙ бер ҙә һиҙелмәйсе... Ғаиләлә бәхетһеҙ икәнегеҙҙе оҫта йәшерәһегеҙ икән...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ (*мыжыған тауыш менән*). Мин бер нәмә лә йәшермәйем! Мине бер кем дә көйҙөрмәй! Минең ғаиләм татыу! Эштән ҡайтыуыма түҙемһеҙләнеп күстәнәс көтөп торалар... Дүртәүләп, тәҙрә төбөндә... Мине улар ныҡ ярата! Ҡайтыуыма ҡыуанып бөтә аламиҙар!..
ҠАТЫН. Һеҙгә ҡыйын түгелме?

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Минең менән булышмағыҙ инде, етәр, сәйнәнмәгеҙ... уйлап табығыҙ...
ҠАТЫН. Тәүҙә үҙегеҙ ныҡлы уйлағыҙ, тинегеҙ ҙә, хәҙер ашыҡтыраһығыҙсы...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Сәғәттәр буйы уйламайҙар инде... Һеҙ тиҙ генә уйларға тейешһегеҙ... Был хаҡта ла алдан килешергә кәрәк булған... Әле лә ваҡытты сикләргә була... Бөттө, ярты минуттан туҡтайбыҙ ҙа, бәхәсте тамамлайбыҙ...
ҠАТЫН. Әҙәмсә уйлау өсөн ярты минут етмәй. Бер минут булһын...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Әллә биш минут бирәйемме, ул саҡта бигерәк шәп була!
ҠАТЫН. Шәп була шул... Ныҡ итеп уйлап та өлгөрөрмөн... Шундай мөмкинлек биреүегеҙ өсөн ҙур рәхмәт...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Нимә өсөн?
ҠАТЫН. Уйланыр өсөн күберәк ваҡыт биреүегеҙ өсөн...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Беҙ ҡайҙа туҡтағайныҡ әле?
ҠАТЫН. Биш минутта...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Мин ысын әйткән, тип уйланығыҙмы?
ҠАТЫН. Үҙегеҙҙең тәҡдим түгелме ни?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Шулай ҙа ул, тик мәғәнәһе һеҙ аңлағанса түгел бит... Бөттө, бер минут бирәм...
ҠАТЫН. Аһ-аһ, вәғәҙәгеҙҙе кире алаһығыҙмы әллә?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Бүтән эштәрем дә етерлек... Сәғәттәр буйы көтә алмайым... Һәр бер урында шул хәтлем ваҡыт сарыф итһәм, эшләргә көсөм дә ҡалмаясаҡ... Күреп тораһығыҙ бит ниндәй ҙур тиҙлек заманында йәшәгәндә. Һуғыш өсөн өс-биш көн дә еткәнен белмәйһегеҙме ни?
ҠАТЫН. Ҡайһы бер һуғыштар йылдар буйы дауам итә... Ни эшләп уларҙы миҫалға килтермәйһегеҙ? Ни өсөн һуғыштар тиҙ бөтмәй? Сөнки ҡайһы бер илдәрҙең эффектлы ҡоралы юҡ... Миңә лә яҡшы фекер етешмәй... Шуға һеҙ үтенесемде аңларға һәм әҙерәк уйлаштырып алырға ваҡыт бирергә тейешһегеҙ...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Уйлау процесын һеҙ нисек һуғыш менән сағыштыра алаһығыҙ? Улар бөтөнләй ҡапма-ҡаршылыҡлы төшөнсәләр бит...
ҠАТЫН. Ҡулығыҙҙа ҡорал булмаһа, идеяларығыҙҙы нисек тормошҡа ашыра алыр инегеҙ һуң?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Беҙҙең алыш мәғәнәһеҙ бәхәскә әйләнде... Яуап бирә алмаҫтай булһағыҙ, нимә тураһында һөйләшкәнде онотайыҡ...
ҠАТЫН. Ярай улайһа, шулай ҙа уйлап ҡарайым әле... Һеҙ... баҙар шарттарын өйрәнәһегеҙ...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Юҡ, дөрөҫ түгел...
ҠАТЫН. Һеҙ шундайға оҡшағанһығыҙ... Йәл, ысын, хатта ҡыйын булып китте...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Берәйһенең, бигерәк тә ҡатындарҙың, балаларҙың эсе бошҡанын, енем һөймәй... Ҡайһы саҡ шуға ла эшемде тамамлай алмай ҡуям... Шуның арҡаһында, күп йылдар эшләү дәүеремдә, ике тапҡыр иҫкәртеү алдым, бер мәл хатта эш хаҡымды кәметтеләр... Ҡайғырмағыҙ инде, зинһар... Һеҙ мине ғәйепләй ҙә алмайһығыҙ, ярҙам итеп әйтештереп торам да инде... Әйҙә был яуабығыҙҙы ла ишетмәмеш булайым... Нисек әйттегеҙ әле? Баҙар шарттарын өйрәнеүсеме? Быңдай һүҙҙе иҫләмәйем дә ул. Әйҙәгеҙ, тәүге һынауҙан башлайыҡ.
ҠАТЫН (*уйлай)*. Һеҙ уҡытыусы...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Нимәнән сығып әйтәһегеҙ?
ҠАТЫН. Уҡытыусылар гел күсенеп йөрөй...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Уҡытыусы менән минең ҡорал араһында бәйләнеш нимәлә?
ҠАТЫН. Дөрөҫөн әйткән, бер нисек тә аңлай алмайым. Уларҙы нисек бәйләргә була? Әллә һеҙ музыка уҡытыусыһымы?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Был музыка ҡоралы түгел, тип күпме әйтергә була!
ҠАТЫН. Барыбер һеҙгә уҡытыусы һөнәре тура килә һымаҡ...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Бәлки, тура киләлер ҙә, тик мин уҡытыусы түгел... Был футлярҙа музыка ҡоралы, тигән уйҙы башығыҙҙан алып ташлағыҙ... Икенсе фекерҙе көтәм...
ҠАТЫН (*сығәткә ҡарап, уйлана*). Мосафир һөнәр... Футлярҙа музыка ҡоралы түгел... Түгел шул... Эшегеҙ төрлө йәштәге ирҙәрҙе, ҡатындарҙы берләштерә... Маҡсат... Сәп...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Яҡынайҙыҡ... Маҡсат, тип дөрөҫ уйлайһығыҙ... Шул һүҙгә фекер туплаһағыҙ, дөрөҫ яуап табасаҡһығыҙ...
ҠАТЫН. Маҡсат... маҡсат... ниндәй маҡсат һуң ул...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Мин һеҙгә тағы ярҙам итеп ебәрәм... Маҡсат нимә өсөн кәрәк (*аңлата*)... Күҙ алдына сәпте килтерегеҙ... Унда ошондай түңәрәктәр бар, ә уртаһында ҙур нөктә...
ҠАТЫН. Атыш, сәп атыр өсөн кәрәк... Футлярҙа һуғыш ҡоралымы?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ (*ҡыуанып*). Эйе! Быны ла һуғыш ҡоралы тип һанарға була... Ысынлап та, футлярҙа ысын һуғыш ҡоралы... Афарин! Һеҙ барыбер уйлап табасаҡһығыҙ...
ҠАТЫН. Һеҙ...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Мин йән алам... Ныҡ ҡына уйлағыҙ... Иғтибар менән! Йән алам!.. Кем йән ала? Уйлағыҙ... Ашыҡмағыҙ... Һеҙҙең һуңғы һынау!
ҠАТЫН. Йән алам, тигәс тә, белдем. Рәхмәт ярҙам итеп ебәреүегеҙгә...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ (*ҡыуанып*). Әйтегеҙ һуң!..
ҠАТЫН. Һеҙ полицейский... Полицейский, полицейский...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Бына һиңә мә!

ҠАТЫН. Белдемме?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Юҡ... Билдәле бер урында эшләмәйем тиһәм дә... Гел генә тегендә-бында йөрөштөрөп торам, тиһәм дә...
ҠАТЫН. Бер районға ғына теркәлмәгән полицейскийҙар бригадаһы була ла инде.
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Етәр, бүтән һуҙмайбыҙ... Һеҙ уйлап тапманығыҙ... Шулай ҙа еңәсәкһегеҙ...
ҠАТЫН. Нимәне күҙ уңында тотаһығыҙ, аңлатығыҙ әле?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ә һеҙ тәүҙә мин үҙемдең һөнәремде әйтеүемде теләмәйһегеҙме ни?
ҠАТЫН. Тағы бер көс һынап ҡарайыммы?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Файҙа булмаясаҡ... Эште генә ҡатмарлаштыраһығыҙ... Иманым камил, һеҙ бер ҡасан да яуапты таба алмаясаҡһығыҙ... Хәлдән килгәнсә ярҙам итеп ҡараһам да... Әммә һеҙ сигенергә йыйынмайһығыҙ... Кейемемде күргәс, кем икәнемде беләсәкһегеҙ инде былай...
*(ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ плащын сисеп, ултырғысҡа ырғыта... ҠАТЫН алдына традицион кейемдә килеп баҫа)*
ҠАТЫН. Әәәәә... Ысынлап та, анһат ҡына икән дә...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Әйттем дә инде... Әйҙәгеҙ, быны һеҙҙең ауыҙҙан ишетәйем, татлы еңеүегеҙҙе мин дә кисерәйем... Йә!
ҠАТЫН. Һеҙ водолаз...
(*ХӘЛ БЕЛЕҮСЕнең ҡулдары, аяҡтары ҡалтырай башлай*)
ҠАТЫН. Шуны ла белмәгәнмен. Анһат ҡына ла инде... Ярҙам иттем тигән була бит әле... Насар... (*һанап китә*) диңеҙ... сажин... сумыу... Ярҙам итһәгеҙ ҙә булыр ине инде...
*(ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ үҙен бик сәйер тота, башындағы сәстәрен йолҡҡандай була... Баштүбән торорға тырышҡан һымаҡ... Сальто-мортале эшләгән һымаҡ та... Стенаға йүгереп килеп, башын бәргеләй... Көс-хәл менән үҙен тынысландыра ла, ҠАТЫНға "шым", тигән ишара яһай... Ҡалтыраған ҡулдары менән футлярҙан традицион ҡоралы – салғыны сығара һәм рәсемдәрҙә символик һынландырылғанса уны ҡулына тота)*
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ (*төшөнкө күңел менән, өҙөк-өҙөк*) Ә хәҙер?
ҠАТЫН. Хәҙер һеҙ ҡулына салғы тотҡан водолаз...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ (*көс-хәл менән кушеткаға ауа, иҫтән яҙа... ҠАТЫН өҫтәлдәге одеколонды мамыҡҡа мановып, ХӘЛ БЕЛЕҮСЕнең танауын, битен, муйынын ышҡый башлай... Күпмелер ваҡыт үткәс, ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ күҙен аса... аптырап тирә-яғына ҡарай...)*

ҠАТЫН. Нимә булды? Ҡан баҫымы күтәрелдәме? Тоҙло айран эскһәгеҙ һәйбәт булыр ине... Тик ҡайҙан табаһың инде ошо мәлдә?

(*ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ төрлөсә ымлап, инәлгән ҡиәфәттә ҠАТЫНдың өндәшмәүен үтенә*)

ҠАТЫН. Һеҙҙең өсөн нимә эшләй алам?

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ (*көсөргәнеп*). Шымығыҙ... Тымып тороуоғоҙ ҙа еткән... Үтенеп һорайым...

ҠАТЫН. Дежур врачты саҡырып килтерә алам...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ (*сығырынан сығып, ҠАТЫНДЫң ҡулын эләктереп ала*). Шымығыҙ! Ауыҙығыҙҙы ябығыҙ! Хәҙер үк ауыҙығыҙҙы япмаһағыҙ, өнөгөҙҙө үҙем тығам! Минән була ул!

ҠАТЫН. Ебәрегеҙ ҡулымды!.. Ауырта ла инде... Тынысланығыҙ...

(*ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ ҠАТЫНдың ҡулын ысҡындыра, тағы инәлгән ҡиәфәткә инә...)*

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ғәфү итегеҙ. Миңә ҡапыл ҡыйын булып китте... Үҙ-үҙемде белмәй, нимә ҡыланғанымды аңламай киттем... (*тороп баҫа... үҙен арыу үк яҡшы хис итә)* Ҡайһы саҡ шулайтып алам мин... Ҡурҡынысы юҡ... Был хаҡта онотоғоҙ, йәме... Берәйһе белеп ҡалһа, мәсхәрәгә ҡалырмын...

ҠАТЫН. Мин бер кемгә лә әйтмәйем... Миңә ышанырға була...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Бына-бына ҡәйнәгеҙ килеп инер... Килеүемдең маҡсатына күсергә ваҡыт. Һеҙ мине тыңлайһығыҙмы ул?

ҠАТЫН. Эйе...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Мине иғтибар менән тыңлағыҙ... Нимә тиһәм дә, йөрәк менән түгел, аҡыл менән ҡабул итегеҙ... Ошо минуттан хистәр түгел, аҡыл ғына өҫтөнлөк итергә тейеш... Килештекме?

ҠАТЫН. Һеҙ тәүҙә әйтегеҙ инде, нисек минең еңелгән хәлдә лә еңеүсе булып ҡалыуымды!

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Быны мин әйтә алмайым... Һүҙҙәрем һеҙгә йоғонто яһаһын өсөн, бүтән аңлатмаларҙы аҙаҡҡа ҡалдырырға тейешмен... Әгәр мин, йәш сәйәсмән кеүек, иң кәрәген алдан әйтеп өлгөрһәм, уңышһыҙлыҡҡа тарыясаҡмын... Беҙҙең эштә хаталанырға ярамай... Ярамы... Башлайбыҙ?

ҠАТЫН. Ярай...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Тәүҙә ирегеҙгә күҙ һалығыҙ... Ҡарағыҙ, ҡарағыҙ...

ҠАТЫН. Мин, уйынға мауығып, уны онотҡан да ҡуйғанмын да ул...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Һеҙ нимә күрәһегеҙ?

ҠАТЫН. Мин уны күрәм...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ул нимә эшләй?

ҠАТЫН. Эшләмәй... Йоҡлай...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Үлек һымаҡ... Шулаймы?

ҠАТЫН. Юҡ... Ҡайһы саҡ күҙен аса... Мине күрә, тирә-яҡты күрә... күҙен йомғолай... илай... бөтә нәмәне лә аңлай бит ул... Уға ҡарап мин дә ҡайғырам...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Шәп! Хәлде аңлауығыҙ һәйбәт... Уның өсөн нимә эшләйһегеҙ һуң?
ҠАТЫН. Тәрбиәләйем... Ул илағанда үҙемде саҡ тыям... ҡайһы саҡ, түҙмәй ванна бүлмәһенә йүгерәм... Йә күҙ йәштәремде аңғармаһын өсөн һүрән шәм ҡабыҙам.
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Тимәк, һеҙ ыҙалайһығыҙ.
ҠАТЫН. Эйе...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Һеҙҙең ыҙалағанды ул аңлаймы?
ҠАТЫН. Эйе...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Тимәк, ул да ыҙалай... икегеҙ ҙә ыҙалайһығыҙ... көнөн-төнөн ыҙалайһығыҙ...
ҠАТЫН. Нимә эшләй алам һуң мин?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Бына шул шул! Бына нимәлә тора эш... Ыҙалауҙан башҡа уның өсөн бер нәмә лә эшләй алмайһығыҙ...
ҠАТЫН. Шул етмәйме ни?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Етмәйме? Ирегеҙҙе яратҡанығыҙҙы аңлайым...
ҠАТЫН. Эйе, ныҡ яратам... Бергә булған бәхетле көндәр... Онотолғоһоҙ төндәр... Нисек инде яратмаҫҡа? Ул минең бөтә тормошом...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Әле генә, минең менән уйынға әүрәп, уны бөтөнләй оноҡайнығыҙ... Бында ул бөтөнләй юҡ һымаҡ күреп...
ҠАТЫН. Мин уны онота аламмы ни инде?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Һеҙ нисек бар, шуны түгел, ә нисек булырға тейеш, шуны һөйләйһегеҙ... Күҙгә күренеп торғанды күрмәмеш булаһығыҙ... Әйҙә бер беребеҙҙе алдамайыҡ...
ҠАТЫН. Эйе, ысынлап, мин уны бер аҙға ғына онотоп торғайным... Тағы нимә генә эшләй алам һуң мин? Дүрт көн буйы уның баш осонда... Йонсоп бөттөм... Артабан нимә булыр, тигән шикле уйҙар йөрәгемде өйкәй.
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Шуға ла һеҙ, мөмкинлек булыу менән, онотолорға тырышаһығыҙ...
ҠАТЫН. Стресс мәлендә табиптар йә балыҡ тоторға, йә бәйләм бәйләргә кәңәш итә... Ирем дә шулай, ти... Шулай, ти ине... Мине шул ғына ҡотҡара...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Дөрөҫ әйтәһегеҙ. Ҡарағыҙ әле, беҙҙең һөйләшеү мәғәнәле була башланы... Сөнки һеҙ ысынбарлыҡтан ҡасмайһығыҙ... шулай дауам итегеҙ ҙә... Һеҙгә еңел булып китер, тынысланырһығыҙ... Бына дүрт көн инде һеҙ эшкә йөрөмәйһегеҙ...
ҠАТЫН. Эйе...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Һеҙгә эшкә йөрөргә кәрәк... Был иҡтисади көрсөктә һәр кем үҙе өсөн йәшәй... Эштән ҡыуырға мөмкиндәр...

ҠАТЫН. Дөрөҫ әйтәһегеҙ...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Эшһеҙ ҡалһағыҙ, нисек йәшәргә уйлайһығыҙ? Бүтән кәсептәрегеҙ бармы һуң?

ҠАТЫН. Юҡ... Алты ай буйына минең эш хаҡына ғына йәшәп маташабыҙ... Ошо арала иремдең кабинеты ябылды... Ундағы бөтә материалды, йыһазды һатырға тура килде...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Хөрт булған...

ҠАТЫН. Мин эшһеҙ ҡалмаҫмын да ул... Кискә ҡәйнәм килә. Көндөҙ иремдең янында ул ултырасаҡ... Мин эшкә йөрөрмөн...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Һеҙ ысынбарлыҡҡа әйләнеп ҡайта башланығыҙ... был мине ҡыуандыра...

ҠАТЫН. Эштән һуң  бында киләсәкмен... Төндәр буйы ирем янында ултырыр өсөн...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ә яратҡан ҡәйнәгеҙ һеҙҙең менән бер кушеткала йоҡлап йөрөйәсәк, ибет...

ҠАТЫН. Күпмелер ваҡыт шулай булыр инде... Бер айҙан уны өйгә алып ҡайтырбыҙ. Ул мәлгә махсус карауат әҙер булыр...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ.  Шунан ҡәйнәгеҙ менән иңгә иң терәшеп йәшәп китәсәкһегеҙ...

ҠАТЫН. Эйе. Сөнки беҙҙең уртаҡ мөхәббәтебеҙ бар... Шуға бер беребеҙ менән ярашыуҙан башҡа сара юҡ. Беҙ телефондан шулай һөйләштек.

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Илай-илай, шулай бит?

ҠАТЫН. Эйе...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Тимәк, был ҡарарҙы ҡабул иткәндә икегеҙ ҙә, әсә лә, ҡатын да аҡылға түгел, хискә буйһонған. Ирегеҙҙең әсәһе инде оло йәштәрҙә, тип берәй мәл уйлап ҡарағанығыҙ булдымы? Әгәр иртәгә ул фани донъянан китә ҡалһа? Шулай тип уйлағанығыҙ бармы?

ҠАТЫН. Юҡ...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Уйлап ҡарағыҙ һуң... Бер мәл, эштән ҡайтыуға, ҡәйнәгеҙ теге донъяға киткәнен күрәсәкһегеҙ... Шунан нимә эшләрһегеҙ?

ҠАТЫН. Шундайыраҡ нәмәне мин теләр инем дә ул...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ә нимә? Оло йәштәрҙәге ҡатын... Күҙен асҡан һайын алдында  - илаған улы... Өмөтһеҙлеккә бирелеп илаған улы... Ниндәй әсә шундай ғазапты күтәрә ала? Кем ул саҡта ирегеҙҙе көндөҙ ҡарар? Көндөҙ эшкә йөрөгәнегеҙҙе онотмағыҙ...

ҠАТЫН. Отпускы алам...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ҡарағыҙ әле, һеҙ тағы хискә биреләһегеҙ... Күп булһа бер айҙы оторһоғоҙ... Кәңәшем шул – бындай осраҡта отпускыға китмәүегеҙ хәйерле... Ә ҡалған ун бер айҙа? Нимә эшләрһегеҙ?

ҠАТЫН. Белмәйем...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Кеше фатирында тораһығыҙҙыр әле, тип уйлайым...

ҠАТЫН. Фатир мәсьәләһен хәл иттек беҙ... Ҡәйнәм ҡала ситендәге йортон һата ла... бында бәләкәйерәген ала... Шулай булғас, арендаға түләү буйынса проблема булмаясаҡ...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Аҡыллы ҡарар... Эшһеҙ ҡалһағыҙ нимә эшләрһегеҙ? Нимә ашап-эсерһегеҙ? Диетала ултырасаҡмын, тигәнерәк алйот хәбәр һөйләмәҫһегеҙ, тип ышанам... Күреүемсә, һеҙҙе артыҡ килограмм проблемаһы ыҙалатмай... Ошо алты айҙа хатта ябығыбыраҡ киткәнгә оҡшайһығыҙ... Бигерәк тә һуңғы дүрт көндә... Дөрөҫмө?

ҠАТЫН. Эйе...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Өҫтәүенә, шәхси фатир бөтә мәсьәләне лә хәл итә алмай... Консьержкаға, электрға, йортто йылытыуға һәм башҡаларға күпме аҡса китә... Шуларға нисек түләрһегеҙ?

ҠАТЫН. Ҡәйнәм пенсия ала...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Социаль пособиелар мәсьәләһен бик белеп бөтмәйһегеҙ, ахыры... Ирегеҙҙең пособиеһын да онотмағыҙ... Бәләкәс кенә... Эсегеҙҙе бошорғом килмәһә лә, әйтәм, бәлки, шул аҡса электр өсөн түләүҙе генә ҡаплай алыр...

ҠАТЫН. Шаштырып ебәрәһегеҙ ҙә инде... Был аҡса бөтә нәмәгә лә етә... Минең эш хаҡы менән арыу ғына йәшәйәсәкбеҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, беҙ әллә нәмәләр ашап ултырмайбыҙ ҙа ул...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ *(ИРҙең күҙен асҡанын күрә*) Күҙен асты... (*ҠАТЫН ИРгә ҡарай... ИР нимәлер әйтергә теләгән һымаҡ... ҠАТЫН үкһеүен тыйырға теләй, түҙмәй, ванна бүлмәһенә йүгерә... ИР күҙҙәре менән ХӘЛ БЕЛЕҮСЕне эҙләй. Уға рәхмәтле ҡарай... "Килгәнең өсөн рәхмәт" тип әйтергә теләгән һымаҡ... ХӘЛ БЕЛЕҮСЕкөлөп ҡуя. ИР менән ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ бер береһенә ихлас йылмая...)*

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Һеҙ мине ишетәһегеҙ, ибет? *(ИР, ныҡ шатланып, күҙҙәрен йомғолай*)

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Мин һине алып китергә килдем... *(ИР бәхетле йылмая)*

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Тик әле генә булдырып булмаҫ... (*Ир күңелһеҙләнеп китә)*

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Минең менән китергә түҙер әмәлең ҡалмағанын беләм дә ул... Һинең һымаҡ өмөтһөҙ ауырыуҙарҙың барыһы ла атлығып тора тиҙерәк китергә... Анһат ҡына китеп булмай шул. Миңә бит Кеше хоҡуҡтарын яҡлау комитеты баҫым яһай... Улар ошондай осраҡта әсәй, ҡатын, ағай йә башҡа иң яҡын

туғандарҙан рөхсәт алыуҙы талап итә... Бына кемдәр минең ҡарарҙарыма йоғонто яһай... Ә беҙ улар ыңғайына йөрөргә тейешбеҙ... Беҙҙең команда күндереү техникаһын ҡулланырға булды... Һин беҙҙең тәүге эксперимент... *(ИР тынғыһыҙлана)*

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ҡатының менән әсәйеңдән рөхсәт алырға кәрәк... аңлайһыңмы? *(ИРҙең йөҙөндә өмөтһөҙлөккә бирелеү күренә)*

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Шул тиклем пессимист булма инде... Ҡатының ризалашырға ғына тора. Әсәйең генә... Икеһенән дә рөхсәт алам мин, ысын!

ҠАТАН (*инә*). Эй, Аллам, сыҙар әмәлем ҡалманы... Иламаһа ине ул... Ул илаһа, миңә ҡыйын...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Был хәлдән сығыу юлы бар инде ул...

ҠАТЫН. Күпме әйттем уға, илама, тип...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Иламай ҡалайтһын... Бөтә нәмәне лә аңлап ята бит ул...

ҠАТЫН. Ойошҡан ҡандың таралыуына өмөт бар ҙа инде... Шуны белә тора илай...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Сирҙе еңә алмаҫын аңлай ул... Үҙе лә заманында өмөтһөҙ ауырыуҙарын өмөтләндерә торғайны... Әйҙә үҙ-үҙебеҙҙе алдамайыҡ... Ошо хәлдән ҡотолоуҙоң берҙән бер юлы (*тынып ҡала*)... Уның йәне күккә осорға тейеш...

ҠАТЫН (*Ир ишетмәһен өсөн, радионың тауышын көсәйтә*) Һеҙ нимә һөйләйһегеҙ ул?

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ.  Уға үлергә тура килә, тим. Аңлайһығыҙмы мине?

ҠАТЫН. Был турала уйларға ла теләмәйем...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Был бөтәбеҙгә лә еңеллек килтерәсәк... Бер нисә көндән үҙегеҙ ҙә: “Ғазаптан ҡотолоп, ҡалай һәйбәт булды әле”, - тип әйтәсәкһегеҙ... Проблема ла хәл ителә...

ҠАТЫН. Ҡәһәр һуҡҡыр тромб ҡасан да тарала, тигән ышаныс ҡына ла шундай теләк теләргә юл ҡуймай бит ул...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ.  Был теләк түгел... Бер генә һүҙегеҙ етә, хәл итергә...

ҠАТЫН. Был нисек килеп сыға һуң ул? Һеҙ уйламайһығыҙҙыр ул... мин үҙем...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ.  Юҡ, юҡ, һеҙ нимә... Был енәйәт  була ла баһаң...

ҠАТЫН. Нимә тәҡдим итәһегеҙ һуң? Кем быға тотона?

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ.  Күп эҙләп торорға кәрәкмәй...

ҠАТЫН. Мин һеҙҙе аңламайым...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ.  Ул эргәгеҙҙә генә, бына ул... (*тынлыҡ*)

ҠАТЫН. Һеҙме ни?.. Ниндәй кеше һуң һеҙ? Һеҙ бит аҡылдан яҙғанһығыҙ! Миңә нисек шуны тәҡдим итә алаһығыҙ?

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ.  Мин кеше лә түгел, аҡылдан яҙыусы ла түгел... Мин ып-ысын үлем фәрештәһе...

ҠАТЫН (*уны ишетмәгәндәй*). Етмәһә, һеҙ уның дуҫы...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Мин уға бер ниндәй ҙә дуҫ түгел. Баштан уҡ һеҙҙе ҡурҡытмаҫ өсөн генә шулай тинем... был хәйлә... хәйләһеҙ донъя файҙаһыҙ, тиҙәр бит... Һеҙ былай ҙа аңлағайнығыҙ минең күптән көтөлгән Ғазраил икәнлегемде... Белмәмешкә һалыштығыҙ... Сөнки, хис-тойғоларығыҙ уйларға бирмәне. Шуны аңлап, һуштар яҙған еремдән иҫемә килдем... Ғүмерҙә лә салғы тотҡан Ғазраил һүрәтен күрмәгәндәй ҡыландығыҙ. Һеҙ был проблеманы аҡыл менән хәл итәм, тип һүҙ биргәйнегеҙ. Шунан? Хәҙер һүҙегеҙҙән баш тартаһығыҙмы ни? Һеҙ, йәш ҡатын... Өҫтәүенә шундай һөйкөмлө, матур... Күп ирҙәрҙең, бигерәк тә эштәге теге сибәр егеттең, хыялы бит һеҙ...
ҠАТЫН. Мин иремә  бер ҡасан да хыянат итмәнем...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ.  Мин улай тимәйем дә инде... Алты ай буйы ләззәттән мәхрүм булыу һеҙҙә тағыла рәхәтлек татыу теләге тыуҙырҙы, был теләк көндән көн көсәйә генә бара... Бигерәк тә һуңғы көндәрҙә... Үҙегеҙҙе алдамағыҙ инде... Етмәһә, дөрөҫ әйтәһегеҙ... Хәлегеҙ ныҡ мөшкөл... Барыбер эстән генә, хыялланып, үҙегеҙҙе ир ҡосағында икәнмен, тип күҙ алдына килтерәһегеҙер әле. Кисергән бәхетле минуттар бүтән ир менән мөнәсәбәтте көйләргә этәргес көс була ала... Сексопатологтар быны эротик фантазиялар, тип атай... Үҙегеҙҙе ғәйепләмәгеҙ... Бөтәһе лә шулай хыяллана... Хатта хәләл ефетенең ҡосағында ла кешеләр икенсе ҡатындың йә ирҙең еҫен иҫкә төшөрә, уларҙың йөҙөн, иренен, енес ағзаларын күҙ алдына килтерә. Үҙегеҙҙе икенсе ир менән һаман да күҙ алдына килтергәнегеҙ юҡмы ни? Ирегеҙ менән йоҡлаған саҡта нисек ине? Күҙ алдына килтермәнегеҙме?
ҠАТЫН (*аптырай. ИР йоҡлай, тип уйлаһа ла, шым ғына һөйләшә*). Мин һеҙҙән ҡурҡам... Һеҙ минең уйымды уҡыған һымаҡһығыҙ...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ.  Мин был темаға дәрестәргә һәйбәт йөрөнөм, ошо өлкәлә уңыштарым да етерлек... Хәҙер һеҙгә фантазия ғына етмәй, тип әйтергә теләйем. Үҙегеҙҙе әрләмәгеҙ, был – тәбиғи хәл... Сөнки һин ир еҫен һағынғанһың. Коллегаң ныҡышып һине яуларға тырышыуына иҫең китеп ҡыуанғанһыңдыр әле...
ҠАТЫН. Барыбер мин уның өйөнә бармаясаҡмын...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Был ҡасанға тиклем дауам итер? Һарыға һабашыуыңды көтәһеңме ни? Йә хәсрәтеңдән эскегә һалышырһыңмы?
(*ҠАТЫН ИР янына килә... ҡулынан тота... уйлана*)
ҠАТЫН. Юҡты һөйләйһегеҙ... Юҡҡа ныҡышаһығыҙ... Хәҙер үк сығып китегеҙ... Мин иремде яратам... Бәләкәс кенә өмөт булһа ла, мин көтәсәкмен...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ.  Мин бит уны алырға килдем... Бер нәмәгә ҡарамай, алып кисәкмен...
ҠАТЫН. Юҡ...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ.  Улайһа мине язаға тарттырасаҡтар...

ҠАТЫН, Тарттырһындар әйҙә!
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Тик быны минең өсөн әһәмиәте көслө... Әйҙә, улайһа, икенсе юлын табайыҡ... Бергәләп... Бер ҙә генә лә юғары категориялы үлем фәрештәһе булыу мөмкинлеген ысҡындырғым килмәй... Һеҙ мине аңлайһығыҙмы?..
ҠАТЫН. Минең дә һеҙгә зыян иткем килмәй... Нисек ярҙам итергә һуң?..
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Улайһа һеҙҙең үҙегеҙҙелә алып китәм...
ҠАТЫН. Нисек инде?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Шулай... Сөнки һеҙ үҙегеҙ риза буласаҡһығыҙ. Был донъянан китеүҙең бер ҡыйынлығы ла юҡ, ысын... хатта ҡыуаныс тойғоһо кисерәсәкһегеҙ әле...
ҠАТЫН. Нимә һөйләгәнегеҙҙҙе үҙегеҙ беләһегеҙме, юҡмы?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ирегеҙҙе ҡотҡарыр өсөн һеҙ үҙегеҙҙе ҡорбан итәсәкһегеҙ... Кеше хоҡуҡтарын яҡлау буйынса комитетҡа был оҡшамаһа, бәләкәй генә штраф түләп ҡотолормон әле. Карьерамда был тәүге уңышһыҙлыҡ... ундай миҫалдар...
ҠАТЫН. Юҡ, юҡ!.. Был мәғәнәһеҙ ҡорбан килтереү... (*ИРҙең ҡулын ысҡындыра*). Ул һауығыуға бер ниндәй ҙә гарантия юҡ бит...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ә һеҙ уның өсөн үҙегеҙҙе тере көйөнсә ҡорбан итәһегеҙ бит. Бер тапҡыр ҙа театрға бара алмаясаҡһығыҙ... Ә үлгәндәр генә театрға йөрөмәй... Мин быны законлы нигеҙҙә башҡарырға тәҡдим итәм... Бер ыңғай үҙемдең миссиямды ла үтәрмен...
ҠАТЫН. Юҡҡа ыҙалайһығыҙ...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Минең бүтәнсә сарам юҡ... Барыһын да нисек бар, шулай ҡабул итеп, китер ҙә барыр, тип уйламағыҙ... Иҫкәртәм! (*ҡулына салғы ала*). Ишетәһегеҙме мине? Һеҙҙе алып китәм!..
(*ҠАТЫН палата буйлап йүгерә башлай...*)
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Һеҙҙең яҡтан был иң ҙур ҡорбан буласаҡ!.. *(салғы менән һелтәнә, әммә ҠАТЫН һәр саҡ ялтарып ҡала...*) Ҡалай һәйбәт булыр ине әле ул, йылы ваннала ятып, дуҫығыҙҙы һәр күҙәнәк менән тойоу... Кемгә кәрәк һеҙҙең ҡорбандарығыҙ? Ирегеҙ шуны баһаларлыҡ хәлдә түгел дә инде... Ә һеҙ ванна бүлмәһендә саҡта ул ҡараштары менән үҙе инәлде, мине ал, тип... (*баҫтырышалар... Шулай ҙа ХӘЛ БЕЛЕҮСЕнең ҠАТЫНды ҡундерергә тырышыуы күренеп тора... сөнки ул салғыһын юрамал тейҙермәй...*) Иң мөһиме – ҡәйнә... Уның һүҙен көтәм тиһәң – ныҡ хаталанаһың! Ул улы менән икәүҙән-икәү ҡаласаҡ! Аңлайһыңмы, улар икәүҙән-икәү буласаҡ. (*Ҡапыл ҠАТЫН туҡтай, ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ лә туҡтай).*
ҠАТЫН. Улар йәшәйәсәк, ә мин...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Эйе. Һин хатта ваннала ла йыуына алмаясаҡһың. Етмәһә ҡәйнәң һинең ҡәбереңә һулыған сәскә лә килтереп һалмаясаҡ!

ҠАТЫН. Унығы дөрөҫ...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Шулай булғас...

ҠАТЫН. Бүтәнсә сараһы юҡмы ни унығ?

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ? (*ҠАТЫН уйлана*)

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Уйланырға ваҡыт ҡалманы... Ҡәйнәңде көт... Китергә рөхсәт ал да, кит. Ваннаға инеп ят... Һине ләззәтле һыуҙа ҡойондорормон... Шунан тәрән йоҡоға талырһың... Үҙеңде ғәйепләй күрмә... Аҙаҡ, ҡыуанып: “Ғазаптарҙан ҡотолғас, уға ҡалай һәйбәт булды”,- тип әйтерһең... миңә рәхмәттәр уҡырһың...

(*ҠАТЫН кушеткаға ултыра... ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ салғыһын төшөрә*).

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Кеше хоҡутарын һаҡлау буйынса комитет аяҡ сала алмай... Үҙ йөкләмәләрен үтәгән өсөн ғорурланасаҡтар ғына. Ә мин инде, үҙ бурысымды үтәгән өсөн ҡыуанып, тәнәйҙәремә бүләктәр алып, ҡатыным әйтмешләй, ҡыҙыл ҡапҡаслы тәҙрәле оябыҙға ҡайтып инәсәкмен... Улар мине әле үк тәҙрә төбөндә көтөп торалар ҙыр инде... Һин бөтәһен дә бәхетле итәсәкһең... Үҙеңде лә... Иң дөрөҫ ҡарар була был... Яратҡан ирең михнәттән ҡотола... Бөтәһенә лә еңеллек килә!

*(ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ тынып ҡала, ҠАТЫН ауыр уйҙарға бирелә).*

## ШАРШАУ

### *Икенсе акт*

*(ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ плащ кейгән.. Салғыһын футлярға тыға... ҠАТЫН уйланып, кушеткала ултыра... Ул аныҡ фекергә килгәнгә оҡшай... ИРҙең күҙҙәре йомоҡ... УЛ ҡуҙғалмай ята... Радионан тыныс ҡына моң ағыла... ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ футлярын ябып, кушетка эргәһенә һала...)*

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ(*сәғәткә ҡарап*). Һуңлай!

ҠАТЫН. Хәҙер килеп етә...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Минең графигым боҙола!

ҠАТЫН. Ул һеҙҙе бында күрмәҫкә тейеш... Мин киткәс кенә күрешерһегеҙ.

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Бының өсөн борсолмағыҙ... Барыһы ла икебеҙҙең арала ғына ҡаласаҡ... *(тынлыҡ. Телефон шылтырай. ҠАТЫН трубканы ала...)*

ҠАТЫН. Алло!..

ТАУЫШ. Һаумы!..

ҠАТЫН, Һаумы!..

ТАУЫШ. Шунан, ҡәйнәң килдеме?..

ҠАТЫН. Хәҙер килә...

ТАУЫШ. Тиҙерәк килһен ине...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ (*шым ғына*). Кем ул?

ҠАТЫН (*телефон трубкаһын ҡулы менән ҡаплап*). Эштәге танышым...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ә, тегеме ни! Оялма, һөйләш... (*аңлаған төҫ менән көлә*) Мөмкинлекте ҡулыңдан ысҡындырма...
ТАУЫШ. Һағынаһыңмы?
ҠАТЫН. Әҙерәк бар...
ТАУЫШ. Ул тиҙерәк килһә һәйбәт булыр ине...
ҠАТЫН. Эйе...
ТАУЫШ. Хәлегеҙ шәптән түгел бит...
ҠАТЫН. Әйтерлек тә түгел...
ТАУЫШ. Эҫе ваннанан хәл инер әле...
ҠАТЫН. Эйе шул...
ТАУЫШ. Мин үҙем дә яңыраҡ ваннанан сыҡтым... Эй рәхәт... Бер бокал вино ла ҡамасауламаны... Арыуым юҡҡа сыҡты... Вивальдины тыңлайым... Минең тәҡдим үҙ көсөндә ҡала...
ҠАТЫН. Хәтеремдә...
ТАУЫШ. Киләһегеҙме?
(*ҠАТЫН өндәшмәй... ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ, түҙмәй, ым-ишара менән ризалашырға кәрәк, тип күрһәтә*)
ТАУЫШ. Һорауыма яуап бирмәнегеҙ...
ҠАТЫН. Эйе...
ТАУЫШ. Бик шатмын...
ҠАТЫН (*тауышы ҡалтырап*). Был турала һөйләшербеҙ әле...
ТАУЫШ. Әлбиттә, һөйләшербеҙ... Ваҡытыбыҙ етерлек буласаҡ...
ҠАТЫН. Тик барыһы  ла ҡәйнәмдең ҡасан килеренә бәйле...
ТАУЫш. Ул тиҙҙән киләсәк... Нимә эшләйбеҙ?
ҠАТЫН. Килгәнен көтәбеҙ...
ТАУЫШ. Оҙаҡламаҫһығыҙ, тип ышанам...
*(ҠАТЫН менән күренмәгән кешенең тауышы ғына ишетелә... ҠАТЫН донъяһын онотҡан... Коридорҙан аяҡ тауыштары ишетелә... ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ ӘСӘ килгәнде аңлай... Хафаланып, ҠАТЫНға был хаҡта ым менән аңлатырға тырыша*).
ТАУЫШ. Мин хәҙер үк ваннаны тултыра башлайым... Һыуға шампунь өҫтәйем, рәхәтләнеп ятырһың...
(*ҠАТЫНдың яуырынынан һелкетеп тә файҙа булмағас, ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ футлярын алып ҡорған артына йәшенә*).
ТАУЫШ. Һин бюстгалтерыңдың элмәген хәҙерҙән үк ысҡындырып ҡуй, ҡайһы саҡ уны ысҡындырып булмай ыҙалата.
ҠАТЫН. Минеке еңел генә ысҡына ул...

*(ӘСӘ палатаға инә... Бер ҡулына пюпитр менән бәләкәй генә сумаҙан, икенсеһенә таяҡ тотҡан. ҠАТЫН ӘСӘне күрә).*
ҠАТЫН (*трубканы һала*). Һау булығыҙ.
ӘСӘ (*әйберҙәрен ырғытып, шым ғына улының карауаты янына килә).* Аһ! Ошо ҡиәфәттә күргем килдеме ни һине? *(иламайса көсләп түҙә... улының ҡулын алып, һыйпай*)
ҠАТЫН. Һеҙ уны уятаһығыҙ...
ӘСӘ (*ҠАТЫНға яман ҡарап*). Ул минең улым! (*шундай уҡ наҙ менән улына әйләнә... ИР уяна, ӘСӘне күрә... Сырайы һытыла... Иламаҫҡа тырыша...)*
ҠАТЫН (*шым ғына*). Иламағыҙ... Врачтар уның эргәһендә иламаҫҡа ҡушты... Ваннаға бүлмәһенә инегеҙ...
(*ӘСӘ, улына ҡыйын булмаһын өсөн, ванна бүлмәһенә китә...*)
ҠАТЫН (*уның артынан*). Туйғансы илағыҙ! Уның карауаты эргәһенә килгәнсә, илап бөтөргә тейешһегеҙ! (*ванна бүлмәһенән крандан һыу аҡҡан тауыш ишетелә).*
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ (*ҡорғанды ҡайырып, башын тыға*). Ә ул кире уйлаһа? (*ым менән ҠАТЫНды үҙенә саҡыра... ҠАТЫН бара*) Эҫе ваннанан хәл керер, секс нервығыҙҙы тынысландырыр, һеҙ ҡаты итеп, ғәмһеҙ йоҡлаясаҡһығыҙ. Өр-яңы кеше булып уянасаҡһығыҙ. Тәнегеҙ һығылмалы, матур булып китәсәк... Бер бер артлы үтәлә торған шул өс процедура ғәләмәт гүзәл, шәп һәм мөһим... Һеҙгә рәхәт... Иртәгә иртән яңынан тыуасаҡһығыҙ. Әйләнеп баҫығыҙ әле... (*ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ арты менән әйләнгән ҠАТЫНдың блузкаһы аҫтына ҡулын тығып, бүтән ирҙәр һымаҡ тупаҫ түгел, ә белеп, иплән кенә бюстгалтерын ысҡындыра. Майҙан сәс бөртөгөн алалармы ни!)* Бына инде һин әҙерһең...
ҠАТЫН (*арбалған һымаҡ*). Рәхмәт... (*ғибәҙәт ҡылғандағы һымаҡ ХӘЛ БЕЛЕҮСЕнең ҡулын үбә...)*
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ваҡыт менән бәхетте әрәм итергә ярамай... Ир кеше өсөн ошо хәлдәге ҡатынды көтөргә мәжбүр булыуҙан да олораҡ яза юҡ. Ул үҙендә ҡабынған утты үҙе һүндерә алған хәлдә лә, һинең ялҡының һүнмәйәсәк. Көтөү ҡатындар өсөн дә ауыр. Утҡа сарсаған вулкан елһеҙ ыҙалаған кеүек... Һин кратер эсендәге вулканды тыйып торорға тейешһең...
ҠАТЫН. Нисек?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Тиҙерәк сыҡһын өсөн берәй нәмә эшлә инде... Тыңла әле, ҡалай үкһеп илай... Әсә тигәс тә... бигерәк тә ул... Тиҙҙән уға тағы ла иларға тура киләсәк... Бар инде, бар!
ҠАТЫН (*ваннаның ишеген шаҡый*). Сығығыҙ инде...
ӘСӘ. Туйғансы иларға ла ярамаймы ни?
ҠАТЫН. Әйҙәгеҙ һөйләшеп алайыҡ... Сәйәхәт нисек үтте?

ӘСӘ. Бында килеп еткәнемдә һиҙмәй ҙә ҡалдым.
ҠАТЫН. Мин ныҡ арыным... Йоҡлағаным да юҡ. Унының тураһында телефон аша һөйләшкәйнек бит инде.
ӘСӘ. Кем ул УЛ?
ҠАТЫН. Һеҙҙең улығыҙ.
ӘСӘ. Эйе, ул минең улым, ә һинең өсөн кем?
ҠАТЫН. Минең ирем... Тағы башланды бөткөлһөҙ сеңләү...
ӘСӘ. Шунан нимә булған...
ҠАТЫН. Ныҡ арыным, тим бит...
ӘСӘ. Ә миңә улым тураһында һөйләшеү оҡшай... Һиңә лә шулайҙыр, тип уйлайым... Нишләп мине алдайһың?
ҠАТЫН. Мин һеҙҙе алдамайым... Бер ҡасан да алдамаясаҡмын. Иртәгә эшкә булғас, нимә эшләйем һуң... Бөгөн ваннала йыуынып өлгөрөргә кәрәк... Улайһа беҙгә һеҙҙең пенсияға ғына йәшәргә тура киләсәк...
ӘСӘ. Шул ғына ҡалмағайны...
ҠАТЫН. Әйҙә тиҙерәк һөйләшеп бөтәйек тә...
ӘСӘ. Минеңсә, хәҙер һине беҙҙең бәхәс бик ҡыҙыҡһындырмай... Элек арыуыңды һылтау итеп, һүҙҙән ҡасмай торғайның. Танмаһаң да була.
ҠАТЫН. Дөрөҫ аңлатманым, ахыры... Мин улығыҙҙы теүәл алты ай ҡараным...
ӘСӘ. Заманынды мине өйҙән ҡыуып сығармаһаң, улай ыҙаламаҫ та инең.
(*ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ, ҡорған артынан башын тығып, ҠАТЫНға тиҙерәк китергә кәрәк, тип ишаралай*).
ҠАТЫН. Үткәндәргә ҡағылмайыҡ... Түҙерлек хәлем ҡалманы...
(*ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ ныҡышып, үҙенең сәғәтенә төртөп күрһәтә*).
ӘСӘ. Мин түҙергә тейеш, тип уйлайһыңмы? Ниндәй икәнең күптән билдәле...
ҠАТЫН. Ә бына һеҙҙең турала бер нәмә лә белмәйбеҙ. Сөнки һеҙ фәрештә.
ӘСӘ. Әйтмә мине фәрештә, тип! (*хатта ИРҙең йөҙөндә лә хафаланыу сағыла... бәхәсте туҡтатыр өсөн ул бына-бына һикереп торор төҫлө*)
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Былай сәйнәшә торғас, ойошҡан ҡан да таралып ҡуйыр әле...
ҠАТЫН. Ярай, һинеңсә булһын... Һеҙ фәрештә түгел... Һеҙ иблес...
ӘСӘ. Телеңде тый! Етте!
ҠАТЫН. Юҡ, етмәне! Фәрештә, тиһәм үсегәһегеҙ, иблес, тиһәм асыуланаһығыҙ. Кем, тип әйтергә лә белмәйем, буталып бөттөм.
ӘСӘ. Мин хатта фәрештә лә икәнмен... Нимәгә төрттөрөп әйткәнеңде белмәй, тиһеңме әллә...
ҠАТЫН. Бер беребеҙҙе ҡалай һәйбәт аңлайбыҙ. Мине мыҫҡыл итеп, зитҡа теймәгәнегеҙгә рәхмәт.

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ (*башын ҡорған артынан сығарып ҡысҡыра*). Кәрәген генә һөйләһәгеҙ ни була, шайтан алғырҙары! (*йәшенә*)
ҠАТЫН. Иртәгә кисен бәхәсте ошо урындан дауам итербеҙ...
ӘСӘ. Әйҙә бөтәһен дә хәҙер хәл итеп ҡуяйыҡ.
ҠАТЫН. Беҙ килешкәнсә булыр... Көндөҙ мин эшкә йөрөрмөн... Эштән һуң бында инеп сығасаҡмын, унан өйгә... Минең менән ҡосаҡлашып йоҡларға бик теләп бармайһығыҙҙыр, тип уйлайым.
ӘСӘ. Әлбиттә, теләмәйем. Әйткәндәй, аҙна башында өйөмдө һаталар... аҡсаһын алам да...
ҠАТЫН. Мин бында ла үҙебеҙгә йорт ҡараштырып ҡуйҙым инде... Ике бүлмә, уртаһында ҙур ҡунаҡ бүлмәһе... Бер бүлмәлә мин бер үҙем йәшәйәсәкмен...
ӘСӘ. Шәп булған... Аяҡ аҫтында уралмаҫһың. Минең бүлмәгә лә бер кем дә инмәйәсәк. Улым ҡунаҡ бүлмәһендә ятыр...
ҠАТЫН. Электр, яҡтылыҡ, телефон, йылылыҡ өсөн түләүгә һеҙҙең пенсия ла етә. Ә минең эш хаҡына кейем, тәмлекәстәр һатып алырбыҙ. Хилүәт йәшәрбеҙ.
ӘСӘ. Бөтәһен дә хәл иттек шикелле?
ҠАТЫН. Әлегә шул. Яңы проблемалар килеп тыуһа, хәлдән килгәнсә тырышырһығыҙ, тип ышанам.
ӘСӘ. Ә мин хәлдән килгәнсә һин дә ярҙам итерһең, тип өмөтләнәм. Һинең өсөн был яңылыҡ, шулай ҙа ниндәйҙер тәжрибәң бар. Минең һүҙем бөттө. Китһәң дә була.
ҠАТЫН (*плащ кейә, яурынына сумкаһын аҫа)*
ӘСӘ. Ә. онота яҙҙым... Берәйһе килмәнеме?
ҠАТЫН. Дуҫтар, коллегалар... Йыш ҡына ялтаҡыл ағайығыҙ килеп йөрөнө.
ӘСӘ. Ә һинең ҡотһоҙ ағайың килмәнеме?
ҠАТЫН. Минең сибәр ағайым килеп йөрөнө. Ә. Тығы кем килде әле, теге бапаҡ, һеҙҙең туғандарығыҙ араһынан... Исеме кем ине әле, иҫләмәйем... Шунан бер йәмһеҙ кешекәй, ғәйбәтсе үҙе... Ярай, Хоҙай үҙе хаким, бына шул килеп китте... (*ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ, енләнеп, ҠАТЫНға сәғәтте күрһәтә)*
ҠАТЫН. Мин киттем...
ӘСӘ. Китә генә бир!..
(*ҠАТЫН сыға... ӘСӘ шунда уҡ икенсе сүрәткә инә: ажғырып торған арыҫландан наҙлы, һөйкөмлө затҡа әйләнә... Сөнки улына ҡарай...*)
ӘСӘ. Балаҡайым! Бәпкәм! (*уға арты менән әйләнеп*) Уның арҡаһында ғына. Алланың ҡәһәре төшһөн!.. (*улына әйләнә... тағы һөйөү тулы күҙҙәре менән баға... Улы ла уға шулай ҡарай. ИР күҙ йәштәрен саҡ-саҡ тыя. ӘСӘ, сумаҙанынан ҙур таҫтамал һөйрәп сығарып,тағы ла ванна бүлмәһенә инеп китә... ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ*

*ҡорған артынан сыға... Ишекте асып, коридорға сыға. Күпмелер ваҡыт үткәс, таҫтамал тотҡан ӘСӘ ваннанан сыға... Күҙен таҫтамалға һөртөп, һыға, унан күҙ йәштәре ҡойола. ӘСӘ таҫтамалды киптерергә элә).*

ӘСӘ. Һинең менән ниһәйәт икәүҙән икәү ҡалдыҡ. Ойошҡан ҡан тарала ла, һин һауыға башлайһың. Бер йылданмы, бер айҙанмы... Һуңғараҡ булырға ла мөмкин, кем белә... Булһын!.. Иң мөһиме – һин шуға ышан. Ә мин һәр саҡ янында буласаҡмын. Һинең өсөн йәшәйәсәкмен. Һинең өсөн йәшәрмен. Хәҙер беҙ бөтәһен дә яңынан башлайбыҙ. Донъяға яңы ғына тыуып, тәүге тәпәй баҫҡандай. Тәүге тапҡыр биргән тауышың һаман да ҡолағымда сыңлай. Ниндәй һөйкөмлө бала инең һин! Беҙ бөтәһен дә яңынан башлайбыҙ. Беҙ хатта һөйләшәсәкбеҙ ҙә әле (*ӘСӘ сумаҙандан ҙур ҡатырға киҫәге сығара. Ҡатырғала алфавиттың бөтә хәрефтәре лә яҙылған. ӘСӘ ҡатырғаны улына ла, тамашасыларға ла күренерлек итеп пюпитрға ҡуя*) Күрәһеңме? Миңә берәй нәмә әйтергә теләһәң, күҙ ҡабағыңды төшөр. Мин бармаҡты хәрефтәр буйлап йөрөтөрмөн. Әлеге һымаҡ. Кәрәкле хәрефтә күҙең менән аңғартырһың. Әйтер һүҙеңде әйткәнгә тиклем һәр хәрефтән һуң алфавит башынан яңынан төшәсәкмен *(ИР барыһын да аңлағанын күҙен йомоп күрһәтә. Шунан тиҙ генә күҙен йомғолай башлай).* Нимәлер әйткең килә. Ҡарале, шундуҡ аңланым. Әйҙә һуң. (*Бармағын хәрефтәр буйлап йөрөтә. Улы күҙен йомғолаһа, яңынан башлай).* М...и...н... һ...и...н...е... я...р...а...т...а...м... Мин һине яратам. Эйе. Ә...с...ә...й. Әсәй. (*ӘСӘ картонды ырғытып, улын ҡосаҡлай. Ошо хәлдә бер минутҡа тын ҡалалар. ӘСӘ ҡулын ысҡындырып, ситкә китә*). Тик һин һүҙ бир. Илама! Бер ҡасан да илама! (*ИР ризалығын белдереп, күҙ ҡабағын төшөрә)*

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ (*тыштан ишек шаҡый*). Берәйһе бармы?

ӘСӘ. Кем унда?

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ (*ишекте асып, инә*). Хәйерле кис...

ӘСӘ. Хәйерле кис, ҡәҙерле...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Мин улығыҙҙың дуҫы...

ӘСӘ. Һеҙҙе танымынымсы...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ваҡыт кешене үҙгәртә. Алдығыҙға ултыртып, кәнфит менән һыйлай торғайнығыҙ, хәтерләйһегеҙме?

ӘСӘ. Хәтерләмәйем (*шикләнеп*). Әйләнегеҙ әле...

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ҡотом осто... Был хәлде ишеткәс, һуң булыуына ҡарамаҫтан, шундуҡ бында йүгерҙем... Шунан, хәле нисек? Нимә булды?

ӘСӘ. Һеҙ бында үтер өсөн әллә рисүәт бирҙегеҙме?

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ (*аптырағанға һалышып*). Ҡайҙан белдегеҙ? Әллә һеҙ ҙә шулайттығыҙмы**?**

ӘСӘ. Эйе, мин дә уларҙың тәпәйенә тотторҙом... Ауырыу улым янына үтеүемдән дә оялманылар... Йә, һөйләп ебәрегеҙ...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Улығыҙ минән бер нисә йәшкә кесе ине... Мин уны нык яраттым... Ул футболда хәтәр шәп уйнаны... Әммә медицинаны һайланы... Һеҙ ул гүзәлдәрҙән гүзәл ҡатын алыр, тип өмөт иткәйнегеҙ, ә ул тотто ла заты-ырыуы булмаған ошоға өйләнде... Уларҙың бәхетһеҙ никахы өсөн уның атаһы, йәғни ирегеҙ нык көйҙө... Ирегеҙ  нисә йәштә үлде әле?
ӘСӘ. Етмештә... Шулай ҙа ул егеттәргә биргеһеҙ ине. Йөрәгенә лә, бөйөрөнә лә зарланманы, рактан да ауырыманы... Мәсеттә намаҙ уҡыманы... Изге урындарға йөрөмәһә лә, күңеле менән бик диндар кеше ине. Кешеләрҙе йәлләне... Бигерәк тә ҡатындарҙы... Шул тиклем дә күп ирҙәр үлгән ил юҡтыр, ти торғайны ҡайһы ваҡыт. Шунан: “Бөтә яңғыҙ ҡатындарҙы ла үҙ ҡанатың аҫтына алырға кәрәк”, - тип өҫтәр ине.
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Дөрөҫөн әйткәндә, мин һеҙҙе бик аңлап етмәнем.
ӘСӘ. Минән тыш ул тағы ла өс ҡатынға ярҙам итте... Ашатты, эсерҙе... Бигерәк иртә китте шул, бигерәк иртә... Шул кеше янғын баҫҡысынан ҡолап төшөр, тип кем уйлаған? Баҫҡыс урынына бушлыҡҡа баҫҡан... Һуңғы ваҡытта күҙе лә хөртәйеп киткәйне шул...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Өйөгөҙҙә янғын сыҡҡайнымы ни?
ӘСӘ. Ул аҫыраған ҡатындарҙың береһендә. Янып торған өй эсенән сығырға маташҡан...(*шикләнеп*). Футлярығыҙҙа нимә ул?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Был скрипка. Скрипка ул...
ӘСӘ. Скрипка һеҙгә нимәгә?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Мин...му...музыкант... скрипач-виртуоз.
ӘСӘ. Ҡалай һәйбәт! Сәнғәт кешеләрен бигерәк яратам мин! Улар бик хисле булалар... Шуның өсөн генә лә оҡшап киттегеҙ әле... Бәләкәй генә концерт ҡуйып ташлайһығыҙмы әллә?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ҡасан?
ӘСӘ. Хәҙер!
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ҡайҙа?
ӘСӘ. Бында.
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Бында?
ӘСӘ. Дауахана палатаһында уйнай алмайһығыҙмы ни?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Уйнай алмайым шул...
ӘСӘ. Нишләп?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ҡаты ауырыған балалыҡ дуҫым ятҡан палатала уйнау килешәме ни? Дөрөҫөн әйткәндә, оҡшамай.
ӘСӘ. Ә нимәһе оҡшамай? Музыка – ул рухи аҙыҡ, үҙегеҙ беләһегеҙ.

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Был төшөнсәне һауһаҡ кешеләргә ҡарата әйтергә була... Улығыҙ бик йомшаҡ күңелле... Скрипка тауышы уны тағы ла нығыраҡ тулҡынландырып, илатырға мөмкин... Илауын теләйһегеҙме?
ӘСӘ. Баланың эсе бошмаһын өсөн бөтәһен дә эшләйәсәкмен... Скрипкала уйнамағыҙ...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Мине аңлауығыҙ өсөн рәхмәт...
ӘСӘ. Скрипканы күргәндән генә илап ебәрер, тип әйтмәйһегеҙҙер ул?..
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Аңламаным...
ӘСӘ. Уның нимәһен аңларға?.. Футлярҙы асығыҙ ҙа, скрипка тип атаған нәмәгеҙҙе күрһәтегеҙ!..
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Футлярҙа ябай скрипка...
ӘСӘ. Улай булғас, ни эшләп уны миңә күрһәтмәҫкә...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Һеҙ миңә ышанмайһығыҙ... Һеҙ мине көйҙөрәһегеҙ...
ӘСӘ. Хәҙер үк күрһәтегеҙ!
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Әллә мин алдай, тип уйлайһығыҙмы? Мин алдамайым...
ӘСӘ. Алдамағас, күрһәтегеҙ!
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Бына һеҙ мине алдаҡсы тиһегеҙ... Алдаҡсы булһам, быны һеҙ иҫбат итергә тейешһегеҙ.
ӘСӘ. Хәҙер иҫбат итәм... Ҡана, бирегеҙ әле футлярҙы...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ә нишләп мин уны һеҙгә бирергә тейешмен?
ӘСӘ. Унда скрипка ятҡан булһа, алдамағанығыҙ асыҡланасаҡ...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ҡулдарығыҙҙы алығыҙ! Минең әйбергә ҡағылаһы булмағыҙ! (*ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ менән ӘСӘ айҡаша башлай... ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ футлярҙы мытҡып тотҡан, ӘСӘ уны тартып алырға маташа... ИР ӘСӘһенә ҡамасауларға тырышҡан һымаҡ күҙен асалаҡ-йомалаҡ итә... ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ был алышта еңә, ӘСӘнең ҡулынан футлярҙы тартып ала.*)
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Бына һеҙ минең алдауымды иҫбат итә алманығыҙ. Күреүегеҙсә, мин алдаҡсы түгел...
ӘСӘ. Сығып китегеҙ бынан! Юҡһа, бер нәмәгә лә ҡарамай, барыбер йүнһеҙ алдаҡсы икәнегеҙҙе иҫбат итәсәкмен...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ҡыйыу булғанға һеҙгә минең ихтирамым көслө...
ӘСӘ. Һеҙ улымдың дуҫы түгел. Мин һеҙҙе белмәйем. Китегеҙ.
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Һеҙ нимә, улығыҙҙы ниндәй хәлгә төшөргәнегеҙҙе лә күрмәйһегеҙме ни? Бынан ары ла үҙегеҙе шулай тотһағыҙ, уға нығыраҡ зыян килтеәрсәкһегеҙ, тип ҡурҡам. Әсә була тороп, үҙегеҙҙе үлем фәрештәһе һымаҡ тотаһығыҙ, ундай нәмәне профессионалдарға тапшырырға кәрәк (*ӘСӘ улы янына килә, наҙлы итеп уның сәсенән һыйпай).*

ӘСӘ. Бер нәмәнән дә ҡурҡма!... Тәнемдә йәнем бар саҡта һиңә бер кем дә теймәç.
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Бер кем дә уға тейергә йыйынмай... Әллә ниндәй мәғәнәһеҙ паранойя...
ӘСӘ. Юҡ. Йыйына...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ә мин улығыҙ бер кемде лә ҡыҙыҡһындырмай, тим.
ӘСӘ. Ҡыҙыҡһындыра...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Кемде һуң?
ӘСӘ. Һине!
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ (*аптыраған булып*). Минеме?
ӘСӘ. Эйе, һине. Һин миңә баштан оҡшаманың. Сәйер кеше һин.
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Һеҙ мине кем менәндер бутайһығыҙ...
ӘСӘ. Мин әле аҡылдан яҙмағанмын...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Мин улай тимәнем. Нишләп улай тип әйтәһегеҙ?
ӘСӘ. Һеҙ үҙегеҙҙе, мин нисек уйлағанмын, шулай тотаһығыҙ, кем икәнегеҙҙе йәшерәһегеҙ.
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Мин музыкант, үҙемдең һөнәрем менән ғорурланам...
ӘСӘ. Миңә әйтергә теләмәгән һөнәрегеҙ менән ғорурланыуығыҙ бик насар.
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Үҙемдең музыкант икәнлегемде мин һеҙгә әйттем.
ӘСӘ. Һөнәрҙең яманы, яҡшыһы булмай. Кирбес һуҡҡанда ямғыр кәрәкмәһә лә, иген үçтергәндә кәрәк. Эш эш инде ул. Кем икәнеңде әйт. Нимә менән шөғөлләнәһең?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ (*тиçкәреләнеүенән туҡтап*). Был бик ауыр профессия... Көнөн-төнөн эшләйһең. Ғаиләм дә иçәпкә бар, һанға юҡ. Ә минең  ял көндәрендә өйҙәгеләрем менән шул тиклем тәбиғәт ҡосағына сыҡҡым килә... Тик мин һәр саҡ юлда, йә дала, йә диңгеҙ, йә күк йөҙө буйлап... эш буйынса... Тәүҙә, әлбиттә, әҙерәк ҡурҡыта ине... яйлап күнектем. Сөнки минең һөнәрем изге, бер кем дә булдыра алмаған һөнәр. Пистолет тәтеһенә баçҡан мәлдә кисергән шатлыҡты аңлай алаһығыҙмы ни һеҙ? Йә һинең теләгең буйынса самолет двигателенең боҙолғанын тулҡынланып көтөүҙәр... Бомба филтәһен берәй мәл ҡабыҙғанығыҙ булдымы?.. Королдәр, президенттар һәм премьер-министрҙар һеҙҙең алда тубыҡланып, ҡурҡыуҙан дер ҡалтырағанын күрҙегеҙме?.. Һеҙҙең берәй ваҡыт король бойороғо буйынса кеше башын сабып өҙгән йәлләт булғанығыҙ бармы? (*ғорурланып*). Үҙ эшемде мин нык яратам...
ӘСӘ. Мин аңаланым... Һин Ғазраил... Атайыңды ла беләм... Әле иçемә төштөң... Атайың үҙ эшенең оçтаһы ине... Ул ни хәлдә әле?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ (*уйланып торғас*). Пенсияға сыҡты. Нервыһы ҡаҡшай башланы, әҙерәк психик ауырыуҙар дауаханаһында ла ятып сыҡты... Хатта уға һаулығын нығытыу өсөн хәтирәләр китабы яҙырға ла кәңәш бирҙеләр. Хәҙер бына шуның

менән шөғөлләнә, барҙы юҡҡа һытылып бара, илай һала, буш ваҡытын ейәндәре менән үткәрә... Тәүбәгә килдем, тип ғариза яҙырға ла маташып ҡарағайны... Советтағы дуҫтары кире дүндерҙе.
ӘСӘ. Яҙырға булған. Йән тыныслығы табыр ине. Күпме кешенең йәнен ҡыйҙы.
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Минеңсә, үткәндәрҙе онотор өсөн хәтирәләр яҙыу бик үк отошло ысул түгел... Китап яҡшы һатылыр, тип кенә үҙен йыуатмаһа... Уны бөгөндән үк инглиз, француз, немец телдәренә тәржемә итергә йыйыналар... Әле урыҫтар менән япондар ҙа был проект менән ҡыҙыҡһына башлаған... Япондарҙан ҡыҙыҡ тәҡдим килгән... Улар хәтирәләрҙе бәләкәй генә CD-romға яҙҙырып, миллионлаған күсермәһен таратмаҡсы... Етештереү арзан булғанға шулайтып була икән... Американдар еңел генә телдә яҙылған, һәйбәт биҙәлештәге, балалар ҙа уҡырлыҡ мауыҡтырғыс китап сығармаҡсы... Тик беҙҙең төп бурыс – китапты ҡытай теленә тәржемә итеү... Сөнки был үҙе бер донъя. Халыҡ иҫәбе буйынса ярты планета тиерлек бит...
ӘСӘ. Ә китаптың исеме нисек була?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. “Ғазраил хәтирәләре”.
ӘСӘ. Исеме есеменә тура килә икән. Яҡшы һатыласаҡ. Мин үҙем дә һатып алыр инем.
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Һатып алып тормағыҙ. Берәй данаһын һеҙгә атайымдын автографы менән ебәрермен. Дөрөҫөн әйткәндә, ҡытай теленә тәржемәне һуҙалар, шуға ныҡ ҡына эсебеҙ боша... Бөтә бюрократия кәртәләрен үтеп сығыу өсөн беҙгә әллә нисәнсе биш йыллыҡты көтөргә кәрәк икән дә.
ӘСӘ. Минең уйымса, әлеге мәлдә уларҙа ла приватизация модаға инә бара...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Беҙ шуға ғына өмөт итәбеҙ инде... Бихисап халыҡ араһында хәтирәләр китабына ла урын табылһа, ҡалай һәйбәт булыр ине.. Һатыу иҫ киткес шәп барһа!.. Ейәндәребеҙ бал да май эсендә йөҙәр ине...
ӘСӘ. Мин бик шатмын... Атайыңа әйт, мин уны алдан уҡ ҡотлайым.
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Әгәр приватизация артабан да дауам итһә? Ҡарағыҙ әле, һаулыҡ һаҡлау, мәғариф һәм мәҙәниәт өлкәһендәге приватизациялар кешелеккә бәлә килтерер һымаҡ бит... Бөтә бәйләнештәр өҙөлә... Сыуалыш башлана... Расаларҙы күрә алмаусанлыҡ көндән көн арта... Һуғыш сыға...
ӘСӘ. Бөтәһе лә приватизация арҡаһындамы ни?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Улай тип кенә әйтеп булмай инде.. Шулай ҙа, приватизация тарҡалышты тиҙләткәненә шигем юҡ... Артабан да шулай дауам итһә, ҡытай йәһәтенән беҙҙең пландарҙың көлө күккә осасаҡ... Халыҡ ныҡ ыҙалай... Мин ул яҡтарҙа йыш булам, гел кәйефем ҡырылып ҡайта.

ӘСӘ. Уларҙың проблемаһы һине борсорға тейешме ни ул? Бөтәһен дә күңелеңә яҡын алма һуң...Улар берәй нәмә уйлап табыр әле...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Һүҙгә әүерәп киттем, ахыры... Тамаҡ кипте. Һыуыткыстан алып берәй нәмә эсәйемме?
ӘСӘ. Унда берәй нәмә булһа, ал...
(*ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ һыуытҡыстан минераль һыу шешәһе алып, аса*)
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Һеҙгә берәй нәмә килтерәйемме?
ӘСӘ. Юҡ, рәхмәт...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ (*шешәнән һыу эсә*). Кем икәнлегем бары бер билдәле булғас, уратып-суратып тормайыҡ...
ӘСӘ. Нимә һөйләреңде сама менән сырамытам, шулай ҙа, әйт...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Миңә йомош ҡуштылар. Иң тәүҙә барыбер һеҙҙең ризалыҡ кәрәк...
ӘСӘ. Элек тә рөхсәт кәрәк инеме ни? Һеҙ тиҙ генә йомошоғоҙҙо йомошлай инегеҙ ҙә – вәссәләм...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Элек бит ул... Демократия, кеше хоҡуҡтары, тип баш ҡатыра башлағайнылар, беҙгә лә уның шауҡымы тейҙе. Һеҙҙең рөхсәтегеҙ кәрәк...
ӘСӘ. Барыһы ла Алла ҡулында... Нисек һин мин ризалыҡ бирер, тип уйлай алаһың ул?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Быны өсөн сәбәптәр етерлек...
ӘСӘ. Быны нисек теләһәгеҙ, шулай атағыҙ... Минең унда ҡыҫылышым юҡ...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Һеҙҙең ҡарашҡа ла быны төп сәбәптәр тип атарға була...
ӘСӘ. Шунан, ниндәй сәбәптәр һуң улар?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Сәбәптәр шундай күп... Ҡайһыларын әйтәйем икән?..
ӘСӘ. Бөтәһен дә әйт... Ниндәй сәбәптәр икәнен ҡарап ҡарарбыҙ.
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Әйтегеҙ әле, улығыҙҙы ҡотҡарыуға өмөт бармы?
ӘСӘ. Бәләкәй генә булып ҡан ойошҡан. Шул ҡан таралһа, улым аяҡҡа баҫасаҡ. Был төп сәбәп түгелме ни?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Дөрөҫөн әйткәндә, һеҙҙең ныҡ кәметеп әйтеүегеҙ мине аптырауға ҡалдырҙы... Бәләкәй генә булып ҡан ойошҡан, тинегеҙ, ә шуның арҡаһында улығыҙ инндәй хәлгә төштө һуң, ҡарағыҙ әле...
ӘСӘ. Ойошҡан ҡан, тромб, таралһа, ул аяҡҡа баҫасаҡ...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ҡасан тарала һуң ул?
ӘСӘ. Белмәйем, әммә барыбер тараласаҡ...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Бер айҙан, бер йылдан, биш йылданмы?.. Ҡасан һуң?..
ӘСӘ. Уныһын белмәйем… Берәй мәл барыбер ул тараласаҡ.
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Улайһа, күпме булһа ла, оҙаҡ ваҡыт үткән хәлдә лә, көтәсәкмен, тип әйтергә теләйһегеҙ инде...

ӘСӘ. Һеҙ шуға шикләнәһегеҙме ни? Ә нишләп ышанмайһығыҙ? Мин пенсияла. Эшем юҡ, бушмын. Улымдан башҡа донъяның ҡыҙығы юҡ. Йортом һатылырға тора. Шундуҡ бынан фатир һатып алырмын. Баламдың эргәһенән бер минутҡа ла китмәм.
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Йорт һатып алһағыҙ, бөтә мәсьәләгеҙ ҙә хәл ителәме ни?
ӘСӘ. Эйе, тиергә була.
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Йортҡа өҫтәмә түләүҙәрҙе ҡаплар өсөн пенсияғыҙ етмәйәсәк...
ӘСӘ. Килендең эш хаҡы бар...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Уға ышанмаҫҡа кәңәш итер инем... Йәш ҡатын...
ӘСӘ. Мин элек тә уға ышанмай инем, нишләп хәҙер ышанырға тейеш?.. Мәрхүм ирекәйем миңә киләсәктә кәрәк булыр, тип бәләкәй генә ер осмото һатып алғайны... Диңгеҙ буйынан, теүәл бер мең биш йөҙ квадрат метр майҙанлы ер... Уны ла һатырмын. Арыу ғына хаҡҡа... Шул аҡсаны үрсетергә банкҡа һалырмын... Минең пенсия менән килендең эш хаҡын ҡушып алғандан да ун тапҡырға күберәк табыш килтерер... Аҡсаға мохтажлыҡ булмаҫ...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Юғары процентҡа ышанып, яңлыша күрмәгеҙ... Иртәгә процент күләме төшөргә мөмкин... Бер нәмә лә мәңгелек түгел... Эш унда ла түгел... Һеҙ бер минутҡа ла, бер ҡайҙа ла сыға алмаясаҡһығыҙ... Балағыҙҙы нисек ошо хәлдә ҡалдыраһығыҙ? Электр өсөн аҡса түләүгә күпме ваҡыт кәрәк икәнен белмәгән кеше һымаҡ хәбәр һөйләйһегеҙ... Кәмендә ярты көн... Телефон өсөн түләүгә тағы ярты көндө ҡушығыҙ... Ә һыу?
ӘСӘ. Проблеманы хәл итеү өсөн берәйһенә әҙерәк аҡса төртөү ҙә етә. Аҡса таш киҫтерә, тиҙәр түгелме?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ә шул берәйегеҙ аҡсағыҙҙы алып, сығып ҡасһа?
ӘСӘ. Кем?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Электр өсөн аҡса түләргә ҡушҡан кешегеҙ...
ӘСӘ. Мин ышанысլы кеше табырмын... Мәҫәлән, һатып алынасаҡ йорттоң консьержаһы...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Консьержаларға бик ышанаһығыҙ, ахыры...
ӘСӘ. Консьержа карьераһынан баш тартыу – был урынды биләү өсөн түккән аҡсаны юҡҡа сығарыу тигән һүҙ... Консьерж булыу – ҙур капитал...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Бөтәһен дә уйлап ҡуйғанһығыҙ икән...
ӘСӘ. Шулай булмайса! Минең улым бит ул...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Әрһеҙлегем өсөн ғәфү итегеҙ инде, һеҙгә нисә йәш?
ӘСӘ. Алтмыш...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Егерме йыл буйына ойошҡан ҡан таралмаһа?
ӘСӘ. Ул мәлдә миңә һикһән йәш була...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Шул тиклем йәшәрмен, тип уйлайһығыҙмы ни?

ӘСӘ. Тромб таралыуға өмөт булһа, йәшәрмен...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Үҙеңә шулай ныҡ ышанырға ярамай...
ӘСӘ (*таяғын ҡулына ала*). Нишләп?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Әйҙә, булмаһа, шул сама нисек йәшәргә йыйынғанығыҙҙы һөйләгеҙ...
ӘСӘ. Көн дә иртән берәр ҡыяр ашайым.. Лимон менән берәй сынаяҡ сәй эсәм... Төшкөһөн шырпы ҡабы ҙурлыҡ сыр ҡабам... Алма... Бәләкәй генә йогурт... Май ашарға ярамай... Кискеһен миҙгеленә күрә тағы берәй йәшелсә... Бер стакан һөт... Ҡурҡыныс фильмдәр ҡарамайым... Маршрут таксиһында, автобуста йөрөмәйем... Тәмәке тартмайым... Сиратта тормайым... Аҡ төҫтәге өс төрлө ағыуҙы бер ҡасан да ҡулланмайым... Нимәгә шул тиклем аптырайһығыҙ? Өс аҡ ағыу – он, шәкәр һәм тоҙ... улар һеҙгә маҡсатығыҙға ирешергә ярҙам итә... Йыш ҡына йәйәү йөрөйөм.. Шулай булғас, нимә миңә оҙаҡ йәшәргә ҡамасаулаһын?...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Үҙегеҙҙе ҡорбан итергә ныҡлы әҙерләнгәнгә оҡшайһығыҙ...
ӘСӘ. Ҡорбан һүҙен дөрөҫ ҡулланмайһығыҙ... Ҡорбан итеү - үҙеңдең бер өлөшөңдө бүлеп биреү тигән һүҙ ул.. Мин бит әсә кеше... Был үҙемде ҡорбан итеү түгел – ә минең бурысым.
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ә мин? Мине йәлләмәйһегеҙме ни? Мине лә әсәйем тыуҙырмағанмы ни?
ӘСӘ. Бында бәйләнеш күрмәйем..
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Мин бурыстарымды үтәй алмаясаҡмын бит. Һеҙ ризалыҡ бирмәһәгеҙ...
ӘСӘ. Бер балыҡ башын сәйнәмәйек әле... Бар, кит...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Китергәме ни? Ул саҡта вазифамда үрләтмәйәсәктәр бит. Һеҙ әсә... Һеҙ бөтә балаларҙы ла йәлләргә тейешһегеҙ...
ӘСӘ. Мин шуға ла бында...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Әсә булыу рәхәтме? Әсә булыу – ул ниндәйҙер бер үҙенсәлек... “Ожмах - әсәнең аяҡ аҫтында,” – тип юҡка әйтмәйҙәр... Донъялағы бөтә балаларҙы ла ҡурсалаған әсә генә ысын әсә ул... Балаға ғүмер биргән әсә түгел, ә уны аҫыраған, тәрбиәләгән әсә... Бөтәһен дә әсә, тип атап буламы ни?
ӘСӘ. Һеҙ мин әйтә торғанды әйттегеҙ...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Һөйләп бөтәйем әле... Мин дә бит үҙемде һеҙҙең бәпкәгеҙгә һанайым... Әсәкәйем, тип әйтмәй саҡ-саҡ түҙеп торам... Әсәй! Әсәй! Әсәкәйем!
ӘСӘ. Килештермәгеҙ әле!..
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ғәфү итегеҙ... Улай тип әйтергә теләмәгәйнем... Һеҙ мине аңларға теләмәйһегеҙ, ахыры...

ӘСӘ. Һине хеҙмәтеңдә үрләтһендәр өсөн баламды алырға рөхсәт итәйемме ни?.. Бар әле сығып кит! Ҡалмаларыңды йый ҙа, шый бынан!.. Аңламайһыңмы әллә, юғал күҙемдән!..
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Улайһа, уның урынына һеҙҙе алырға рөхсәт итегеҙ...
ӘСӘ. Нимә әйткәнеңде аңлайһыңмы һин, юҡмы?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Улым өсөн бөтә нәмәгә лә ризамын, тинегеҙ бит. Тимәк, үлергә лә ризаһығыҙ...
ӘСӘ. Әгәр мин китһәм, ул ҡатыны менән генә ҡаласаҡ... Дөрөҫөн әйткәндә, мин уға ышанмайым... Ул ташлап китһә, бәпкәмде кем ҡарар?.. Һин сығып кит – иң һәйбәте шул булыр!..
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ (*йәне көйөп).* Һеҙҙе өгөтләү килеп сыҡмағас, көс ҡулланырға тура килер... Иҫкәртәм... Көс ҡулланасаҡмын!..
ӘСӘ (*таяғын ҡылыс һымаҡ күтәреп*). Көс ҡулланып ҡына ҡара!
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ (*салғыһын тартып сығара*). Һеҙ мине сығырымдан сығараһығыҙ. Оло кешегә ҡул күтәрергә тура килә инде. Хоҙайым ғәфү итһен.
(*Улар һуғыр өсөн бер береһен уратып йөрөй. ИР нык борсола. ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ салғы менән һелтәнә, ӘСӘ һөжүмде оҫта ғына кире ҡаға. ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ тағы ла һелтәнә, ӘСӘ ҡаршы тора..).*
ӘСӘ. Күрҙеңме, мин көрәштең бөтә алымдарын да беләм. Юҡҡа маташаһың. Еңелмәҫ борон сығып ҡас, намыҫыңды һаҡла...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Быға тиклем минең бер ҡасан да еңелгәнем булманы...
ӘСӘ. Ун ирҙең туғыҙы ҡасан ҡасырға кәрәк икәнен белә... Ҡас, тип әйтмәйем дә инде. Хушлаш та, сығып кит!..
(*ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ асыуланып, тағы һөжүм итә, ӘСӘ оҫта итеп кире ҡаға*)
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Мин һөжүм итә генә беләм һәм уңышҡа өлгәшә генә беләм... Бында беҙ бушҡа ваҡыт үткәрәбеҙ... Һин минең һымаҡ тәжрибәле була алмайһың... Көрәштән баш тарт. Һуң булмаҫ борон... *(ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ йән көсөнә салғыны бер ҡулынан икенсеһенә ырғыта, үҙе белгән төрлө трюктарҙы күрһәтә... Тағы һөжүм итә... ӘСӘ, тореадор һымаҡ, еңел генә ситкә һикерә, ХӘЛ БЕЛЕҮСЕнең йүнәлешен алдан белеп, уға таяғы менән һуға. ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ ҡаршылағы стенаға барып терәлә. ӘСӘ йәшен тиҙлегендә уға атыла, елкәһенән тотоп, арҡаһына йығып һала. ӘСӘ уның ҡулына баҫҡас ысҡынған салғыны аяғы менән тибеп осора...)*
ӘСӘ. Мин һиңә иҫкәрттем...
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Мине хәҙер нимә эшләтәсәкһең?
ӘСӘ. Ә нимә эшләтәйем һуң?
ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Лайыҡлы үлем менән үлгем килә...

ӘСӘ. Үлем – үлем инде ул. Юҡ итеү. Әсә кешегә юҡ итеү килешмәй. Мин кире уйламаҫ борон тор ҙа, сығып кит! (*Ҡулына салғы ала. ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ туҡмалған эт хәлендә аяҡҡа баҫа)*

ӘСӘ. Атайыңа сәләм әйт... Китабы уңышлы булһын, алдан уҡ ҡотлайым. Автограф менән ебәрһә, ҡыуаныр инем... Китабының һәйбәт һатылыуын теләйем...

(*Телефон шылтырай... ӘСӘ, ҡулынан салғыны ысҡындырмай ғына, телефон трубкаһын ала)*

ӘСӘ. Алло...

ҠАТЫН (*тулҡынланған тауыш менән*). Был мин...

ӘСӘ. Йә Хоҙай! Нимә булды? Өйҙә түгелһеңме әллә?..

ҠАТЫН. Өйгә ҡайттым да... кире килдем... Һеҙҙән ғәфү үтенергә...

ӘСӘ. Ҡайҙан шылтыратаһың?

ҠАТЫН. Дауахана ишеге алдында торам... Эйе... Иремде беҙ икебеҙ ҡараясаҡбыҙ... Ойошҡан ҡан таралғанса...

ӘСӘ. Ярай... Һин дә мине ғәфү ит... Ярай, бар, ял ит (*трубканы урынына һала).*

ӘСӘ *(ХӘЛ БЕЛЕҮСЕгә*). Нимә һаман тапанып тораһың?

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ҡоралымды бирмәҫһегеҙ микән?

ӘСӘ. Юҡ! Бар, тай бынан!

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Берәй мәл һеҙҙең менән осрашырбыҙ, тип ышанам... Эшемдән ҡыумаһалар инде… Һуңғы тапҡыр бер һүҙ әйтергә яраймы?

ӘСӘ. Әйт.

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Нимә әйтһәм дә – буш һүҙ булыр... Киләсәктә күҙ күрер, тигәндәй... Тик шуны онотмағыҙ – кеше кәүҙәһе бик ауыр ул!..

ӘСӘ. Улымдың кәүҙәһе бер ҙә ауыр түгел!

ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ. Ниндәй оло мөхәббәт! Ниндәй сабырлыҡ, Аллаҡайым! Бәлки, шуға ла ер йөҙөндә ожмах хөкөм һөрәлер. Кем белә? (*ХӘЛ БЕЛЕҮСЕ ишекте асып, сыға)*

ӘСӘ. Быныһын еңдек тә ул, ҡалған үлем фәрештәләре менән нимә эшләргә? (*ИР күҙе менән ишаралай*)

ӘСӘ (*ҡатырғаны ала*). Әйт, улым, әйт... Эйе. М...и...ң...ә... ә...к...и...ә...т... һ...ө...й...л...ә. Әкиәт һөйләргәме? Аҡыллым минең, ҡалай һәйбәт һөйләшәһең! Әкиәтте һиңә һөйләмәй кемгә һөйләйем! Мин гел һөйләрмен, йәме... (*радионы ҡабыҙа, улы эргәһенә кушеткаға ултыра. ҠАТЫН да инә, ире янына ултыра. Уның ҡулын алып, һыйпай. Шым ғына тыңлай)*

ӘСӘ. Борон-борон заманда, кәзә командир, өйрәк – үрәтник, бүреләр – бағауыл, ҡарғалар ҡарауыл булып торғанда йәшәгән, ти үҙен үлем фәрештәһе тип һанаған кешеләр. Улар йәшенең дә, ҡартының да бер туҡтауһыҙ йәнен ҡыйған. Халыҡ төшөнкөлөккә бирелгән, гәзит уҡымаҫ булған. Быны иң тәүҙә әсәләр аңғарып

ҡалған. Шунан аҙ-аҙлап улар ирҙәре менән урамға сыға башлаған... ышанһаң ышан, ышанмаһаң - юҡ… (*тора-бара ӘСӘнең тауышы тыма... Әкиәтте ул тауышһыҙ ғына һөйләй)*

ШАРШАУ